✓ ***Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№45 (567)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәш миллионер кәңәше,**
йәки Дуҫтар менән эшҡыуарлыҡ булдырмағыҙ
5



**Иңебеҙҙә...**
оло яуаплылыҡ
6



**Аймаҡтарҙы тергеҙәйек,**
йәки Ауылдарҙы нисек һаҡлап ҡалырға?
8-9,13



**Бабич рухы...**
илен һөйгән һәр кешелә йәшәй
11



14 ТВ-программа

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Күптән түгел Рәсәй Президенты Владимир Путин милләт-ара бәрелештәр өсөн төбәк һәм муниципаль власть етәкселәренең яуаплылығын билдәләп, ошондай хәлдәрҙе ваҡытында иҫкәртә алмағандары өсөн уларға ҡарата эштән бушатыуға тиклем сара күреләсәк, тине. Был закон милләт-ара тыныслыҡ һаҡлауға булышлыҡ итерме - нисек уйлайһығыҙ?

***Румил АҘНАБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Мәсьәлә дөрөҫ ҡуйыла, тип уйлайым, ләкин бөгөн милләт-ара проблемаларҙың ифрат та ҡатмарлы, киҫкен тороуын иҫәпкә алғанда, был сара ғына етмәй, минеңсә. Милләт-ара мәсьәләләрҙе яйға һалыу өсөн аныҡ һәм эшләүсе закондар кәрәк. Бөтә эште төбәк етәкселәренә генә ҡалдырып ҡуйырға ла түгел, ә урындағы халыҡтар үҙ-ара аңлашып, татыу йәшәһен өсөн үҙәктән дә ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ваҡытында көйләү, позитив йүнәлеш биреү кәрәктер ул. Үҙәк матбуғаттан күренеүенсә, конфликттарҙың күбеһе әлеге шул ситтән килгән халыҡ - мигранттар ҡатнашлығында барлыҡҡа килә. Миграция мәсьәләһендә бик күп көйләнмәгән, контролдә тотолмаған өлкәләр бар әле. Һәр бер хужа үҙ өйөндә нисә кеше бар, кем килә, кем китә - бөтәһен дә белеп торорға тейеш бит. Шунын кеүек үк, беҙ ҙә республикабыҙға кемдәр килеп, ниндәй шөғөл ҡылып йөрөгәндәрен белеп, күреп торорға тейешбеҙ. Иҫәп юҡ, виза режимы юҡ... Республикабыҙ күпме мигрант-эш көсөнә мохтаж, ситтән күпме кеше килә, урындағы халыҡтың мәшғүллек мәнфәғәтенә янамаймы был һәм башҡа шундай һорауҙарға яуаптар тейешле ведомстволар тарафынан алдан әҙерләнгән булырға тейеш. Ус төбөндәге кеүек күренеп торһон ул, юғиһә, кем теләй - шул килеп, бында үҙ мәнфәғәтен өҫтөн ҡуйырға, закон боҙоуҙарға юл ҡуйырға, өйөндәге кеүек ҡыланырға тейеш түгел. Урындағы халыҡтың мәшғүллек хәле менән ситтән килеүселәрҙе эш менән тәьмин итеү кимәлдәре араһында ниндәйҙер логикаға ярашлы нисбәт булырға тейеш. Әйткәндәй, Өфөлә РФ Президенты ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет ултырышында булып үткән кәңәшмәлә Владимир Путин тап ошо мәсьәләне лә айырым һыҙыҡ өҫтөнә алып китте: **"Федерация субъекттарының өҫтәмә эш көсөнә ихтыяжын билдәләүсе хеҙмәт карталары төҙөү хаҡында уйлашырға кәрәк"**, - тине ул. Әлбиттә, урындағы хужалар төбәктәге милләт-ара хәлдәр өсөн тулыһынса яуаплы, һүҙ ҙә юҡ, шул уҡ ваҡытта, әйтеүемсә, Үҙәктән көйләнәһе мәсьәләләр байтаҡ әле.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ЗЫЯЛЫЛАР - "КИСКЕ ӨФӨ" ТУРАҺЫНДА

# ГӘЗИТЕБЕҘ...

## беҙҙең менән саф башҡортса һөйләшә

**"Киске Өфө" гәзите - ул Башҡортостандың үҙаллылығы емеше. Бәлки, шуғалыр ҙа, ул башҡа баҫмаларҙан үҙенең үҙаллы булыуы, саф башҡортса һөйләшеүе, һәр өлкәлә милли мәнфәғәттәрҙе яҡтыртыуы менән күңелдәргә бигерәк тә яҡын. Ниндәй генә тема яҡтыртылмаһын, авторҙар иң тәүҙә мәсьәләгә милли күҙлектән баға, халҡыбыҙ ихтыяжын хәстәрләй.**

"Саф башҡортса һөйләшеү" тигәнгә айырым баҫым яһағы килә, сөнки "Киске Өфө"лә сыҡҡан мәҡәләләр башҡорт теленең төрлө диалекттарында ҡулланылған һүҙҙәргә иҫ киткес бай. Материалды уҡыу менән шул төбәк кешеләре менән һөйләшкәндәй булаһың. Телдең моңон һаҡлай белеүе баҫманы халыҡсан итә. Был - бер.

Икенсенән, гәзиттә зыялылар майҙаны булдырып, әңгәмәләр, диалогтар ойоштороп, шәхестәрҙе шулай уҡ халыҡҡа, бер-береһенә яҡынайттылар. Гәзит биттәрендә яҡтыртылған һөйләшеүҙәр аяғөҫтө бармай, киреһенсә, оҙайлы фекер алышыуҙар һөҙөмтәһендә яңы ҡараш тыуа, бер-береңә мөнәсәбәт үҙгәрә. Шуныһы ҡиммәт: баҫма ниндәй генә теманы күтәрһә лә, ваҡлыҡҡа, түбәнселеккә юл ҡуймай. Бөгөнгө "һары матбуғат" киң таралған, журналистар сенсация артынан ҡыуған заманда милли кимәлде тота белеү шул тиклем мөһим. Ата-бабаларыбыҙ рухын тойоп, быуаттар төпкөлөнән ҡарап, заманыбыҙ йөрәген һиҙемләп ижад итә алғандары өсөн рәхмәт редакция хеҙмәткәрҙәренә!

"Булыр илдең балаһы бер-береһен батыр тир", тигән атай-олатайҙарыбыҙ. "Киске Өфө" гәзите булыр ғына түгел, бар һәм тиндәр араһында тиң булып гөрләп йәшәр милләт баҫмаһы икәнен иҫбатлай килә һәр милләттәшенә. Байтаҡ баҫмаларға күптән ышанысын юғалтҡандарҙың ҡулына "Киске Өфө"нө алып, ҡабат айырылмағанын беләм. Мәркәздәрҙән тороп, республика ғына түгел, тотош Оло Башҡортостандың һулышын тойоп, шуны башҡаларға еткереп йәшәй баҫма.

**Лариса АБДУЛЛИНА,**
**шағирә.**



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.

Ноябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ -**"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Гөлфиә Янбаеваның "Елле фекерҙәр елгә осмаһын"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигеүк, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

**Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Күптән түгел Рәсәй Президенты Владимир Путин милләт-ара бәрелештәр өсөн төбәк һәм муниципаль власть етәкселәренең яуаплылығын билдәләп, ошондай хәлдәрҙе ваҡытында иҫкәртә алмағандары өсөн уларға ҡарата эштән бушатыуға тиклем сара күреләсәк, тине. Был закон милләт-ара тыныслыҡ һаҡлауға булышлыҡ итерме - нисек уйлайһығыҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Фәтхулла ҠАҺАРМАНОВ, хеҙмәт ветераны:*** Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Өфөлә булып үткән Милли мәсьәләләр буйынса Совет ултырышынан күберәкте көткәйнем, сөнки ил эсендә күптән бирле быҫҡып ятҡан усаҡты хәтерләткән был проблема бер һәм берәгәйле хәл ителешен көтә бит. Юғиһә, Кавказ һәм, ғөмүмән, мосолман халҡына ҡарата күрәалмаусылыҡ, нәфрәт тойғоларын хатта ки закон сығарыусы юғары власть трибунаһынан тороп белгертә башланы бит ҡайһы бер һөмһөҙ сәйәсмән-депутаттар. Мәҫәлән, 24 октябрҙә Рәсәй телеканалынан ЛДПР башлығы Кавказ халҡын"сәнскеле тимер сыбыҡтар менән бәйләп", уларға балалар тыуҙырыуҙы тыйырға, тип, фашистарса, енәйәтсел мөнәсәбәтен асып һалды.

Әйткәндәй, Өфөләге кәңәшмәлә, нишләптер, милләт-ара мәсьәләләрҙе нигеҙҙә мигранттарға ғына бәйләп ҡуйҙылар. Ә бит төбәктәрҙә даими йәшәүсе халыҡтарҙың үҙ-ара килеп тыуған ығы-зығыһы, власть әһелдәренең төбәктә йәшәүсе ҡайһы бер милләт вәкилдәренә бер төрлө генә булмаған мөнәсәбәте һәм шул арҡала килеп тыуған ризаһыҙлыҡтар хаҡында бөтөнләй һүҙ булманы. Урындағы халыҡ тауышын ишетмәгән властың ниңә кәрәге бар, тип әйтмәнеме әле Путин? Мигранттарҙы, ярай, хоҡуҡ тәртибен боҙған өсөн ҡыуып ҡайтарып та ебәреп була, ләкин ҡайһы саҡта милләт-ара мәсьәләләр урындағы властың урындағы ҡайһы бер халыҡтар вәкилдәренә субъектив мөнәсәбәтенән дә килеп тыуа бит. Мәҫәлән, айырым бер милләттән булған төрлө кимәлдәге етәксе кадрҙарҙы юҡ-бар сәбәп менән вазифаларынан бушатып, икенсе милләт вәкилен килтереп ултыртыу һәм шуның менән был милләт вәкилдәренә власҡа юл ябыу, урындағы халыҡтың теленә, тарихына, мәҙәниәтенә төкөрөп ҡарау, мәктәптәрҙе ябыу кеүек билдәле бер халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән йәшертен сәйәсәт өсөн яуаплымы төбәк етәкселеге, әллә улар мигранттар мәсьәләһен генә контролдә тотасаҡмы - бына шуныһы миңә аңлашылып етмәне бит әле бер ҙә. Урындағы милләттең йыйылып киткән аһзарҙарын йылдар буйы ишетмәгән власть менән нисегерәк аңлашырға икән һуң?..

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр:*** Милләтенә, теленә, диненә, расаһына, тәненең ниндәйерәк төҫтә булыуына ҡарамайынса, уларҙың иркенең, хоҡуҡтарының тиңлеген тәьмин итеүҙе урындағы власть башлыҡтарына йөкмәтеү, әгәр баяғы хоҡуҡтар боҙолған хәлдә, был етәкселәрҙе ҡаты яуаплылыҡҡа тарттырыу дөрөҫ тә кеүек. Административ берәмектәрҙең башлыҡтары үҙ биләмәләрендәге хәлдәр өсөн, шул иҫәптән милләт-ара тыныслыҡ өсөн дә, элек тә яуаплы инеләр. Хәҙер уларҙы, милләт ара ығы-зығы килеп сыҡһа, яуапҡа тарттырырға, тигән закон ҡабул итеп, ныҡлап ҡурҡытырға уйлайҙар шикелле. Ярай ҙа был закон эшләп китһә. Ә эшләмәһә? Беҙҙә күпме закон ҡабул ителеп тә ҡулланылмай, ҡағыҙҙа ғына ҡала килә. Мин элеккe прокурор булараҡ, быны бик тә яҡшы беләм.

Унан һуң, тәртип өсөн иң тәүҙә хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре яуап бирергә тейеш, минеңсә. Улар үҙ биләмәһендәге хәлде даими күҙәтеп торорға бурыслы һәм улар өсөн көтөлмәгән хәл килеп сығырға тейеш түгел. Әгәр килеп сыға икән, иң тәүҙә яурынында погон йөрөтөүсе яуап бирергә тейеш. Район башлыҡтары, ауыл биләмәләре етәкселәре хоҡуҡ тәртибе һаҡлау өлкәһендә белгес түгелдәр. Ә погон таҡҡан кеше профессионал булараҡ иң тәүҙә яуап бирергә тейеш.

Мине дөйөм Рәсәйҙәге хәлдән бигерәк, үҙебеҙҙәге хәлдәр уйландыра, борсолдора. Әлбиттә, Рәсәй тигән федерацияла йәшәгәс, дөйөм дәүләттә барған бөтә проблемалар беҙҙә лә үҙ сағылышын таба. Шул уҡ мигранттарҙың ябырылыуына, уларҙың беҙгә килеп, төрлө енәйәттәр ҡылыуына ла битараф була алмайбыҙ. Мигранттар урындағы халыҡты бигүк һанға ла һуғып бармай әле ул. Сөнки улар белә: бында уларҙы беҙ индермәгәнбеҙ, ә Рәсәй тигән дәүләт индергән, тимәк, урындағы халыҡ менән бигүк иҫәпләшмәгәндә лә була, тип уйлайҙар. Хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләгән Кавказ вәкилдәренә күҙ һалығыҙ әле: нисегерәк һөйләшә, нисегерәк тота әле улар үҙҙәрен беҙҙең алда! Яңыраҡ береһенә үҙен һауалы тотҡан өсөн тәнҡит һүҙе әйткәйнем, хеҙмәтләндереүҙән баш тартты. Был миҫалдан сығып ҡына ла әйтергә була: беҙҙең республикаға кем генә килһә лә, улар башҡорт менән дә, урындағы башҡа милләт вәкилдәре менән дә бигүк иҫәпләшеп бармаясаҡ. Иҫәпләшһендәр, урындағы традицияларҙы хөрмәт итһендәр өсөн барыбер ҙә ниндәйҙер закондар кәрәк. Мәҫәлән, Рәсәйгә килгән мигранттар рус телен белергә тейеш, тигән талап ҡуйылды. Минең уйымса, республикаға эш эҙләп килгән мигранттар урыҫ теле, Рәсәй тарихы менән бер рәттән, башҡорт теленән һәм республика тарихынан да имтихан бирергә тейеш. Ошо ерҙең башҡорт ере һәм уларҙың бында төп хужа икәнен ситтән килгәндәр тойорға тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Президентының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға 2014 йылға Мөрәжәғәтнамәһе проектын әҙерләү буйынса эшсе төркөм төҙөү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Эшсе төркөм етәксеһе итеп БР Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Рөстәм Мәрҙәнов тәғәйенләнде. Уның составына 16 кеше инде. Бойороҡҡа ярашлы, 25 ноябргә тиклем Мөрәжәғәтнамә проекты әҙерләнеп, республика Президенты хакимиәтенә, 1 декабргә тиклем проекттың һуңғы редакцияһы депутаттар корпусына тапшырылырға тейеш.

✔ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышын үткәрҙе, унда һаулыҡ һаҡлау системаһын модернизациялауҙы тормошҡа ашырыу йомғаҡтары тикшерелде. Иң элек бында матди-техник базаны яңыртыу күҙ уңында тотола, тип билдәләне Президент. Билдәләнеүенсә, өс йылда Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә федераль бюджеттан 16,5 миллиард һум самаһы аҡса йүнәлтелгән, шуның 4,5 миллиарды - базаны нығытыуға, 10,5 миллиарды - медицина ярҙамының берҙәм стандарттарын индереүгә һәм эш хаҡын күтәреүгә, 600 миллионы - медицина учреждениеларын мәғлүмәтләштереүгә киткән.

✔ Өфөлә үткән Рәсәй-Британия түңәрәк өҫтәлендә ҡатнашыусылар биотехнология өлкәһендә перспективалы хеҙмәттәшлек йүнәлештәрен билдәләне. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Дмитрий Шаронов фекеренсә, биотехнологиялар өлкәһендә ике яҡлы мөнәсәбәттәр "түбән кимәлдә тора", әммә улар ҙур перспективаға эйә. Великобританияның Екатеринбург ҡалаһындағы Генераль консулы Нил Сэмпл ике яҡтың да ихтыяжын сағылдырыусы бер нисә йүнәлеште билдәләне. Улар иҫәбендә - фармацевтика препараттары етештереү, синтетик биология, регенератив медицина. Атап әйткәндә, Великобританияла синтетик биология өлкәһендә ғилми эштәр әүҙем алып барыла - хөкүмәт тикшеренеүҙәрҙе 20 миллиард фунт стерлинг күләмендә финансларға әҙер.

✔ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов академик, тарих фәндәре докторы, профессор Нияз Мәжитовты Салауат Юлаев ордены менән наградлау тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Билдәле ғалим, "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы директоры урынбаҫары юғары наградаға уңышлы ижтимағи һәм фәнни эшмәкәрлеге өсөн лайыҡ булды.

✓ Шул осорҙа Зәйнулла ишан Рәсүлев тап шул көнсығыш төбәктә "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен барлыҡҡа килтерә. Административ яҡтан Башҡорт иле менән көнсығыш араһындағы күпер яндырылғас асыла мәҙрәсә.



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЯҠТЫЛЫҠ ҠАЙҘАН СЫҒА...

## ҡеүәт тә шунда

**"Бел, ҡояштан ҡапланырға мөмкин, мөмкин түгел ҡаплау ҡояшты..." тип яҙған Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов. Һәр бер тере йән эйәһен, үҫемлекте, бөжәкте, йәнлекте, хайуанды ҡояшҡа ынтылыу көсө йәшәткән кеүек, һәр кешене, халыҡты, йәмғиәтте, дәүләтте яҡтылыҡҡа, юғарылыҡҡа ынтылыш йәшәтә донъяла. Әммә ҡояшҡа, яҡтылыҡҡа ынтылыш, көнбайыштан көнсығышҡа табан яу менән барырға кәрәк, тигәнде аңлатмай.**

Бының сере ябай ғына: көнсығышта йәшәүселәр һан буйынса көнбайыштағыларҙан күберәк, ҡеүәтлерәк. Быға "Википедия"нан килтерелгән мәғлүмәттәргә күҙ һалғанда ла инанырға була. Яҡтылыҡты еңеп булмай. Хәҡиҡәт менән дә шул уҡ хәл. Нимә тиҙәр әле: хатта кешелектең күпселек өлөшө ялғанға табынып йәшәгән тәҡдирҙә лә, хәҡиҡәт барыбер йәшәй. Яҡтылыҡ менән дә шулай уҡ. Философтар төн менән ҡараңғылыҡ юҡ тиҙәр. Улар бары көн менән яҡтылыҡтың ваҡытлыса юҡ сағындағы хәл-күренеш кенә. Шуға күрә был яҙылмаған ҡанун кешелек тарихының һәр дәүерендә лә мотлаҡ үтәлергә тейешле талап, шарт һаналған. Әлбиттә, был ҡанунды емерергә маташыусылар, йәғни көнбайыштан көнсығышҡа табан яу менән барыусылар һәр заманда ла табылып торған. Уларҙың береһенең дә юлы уңмаған: сөнки яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда.

1812 йылдың 22 июнендә Наполеон "Бөйөк армия" хаҡындағы фарманына ҡул ҡуйғандан һуң, уның 600 меңдән ашыу һалдаттан торған армияһы Мәскәүгә юллана. Теүәл 129 йылдан һуң, 1941 йылдың 22 июнендә, Гитлерҙың 5 миллиондан ашыу һалдаты шул уҡ юлға сыға. Ике осраҡта ла Рәсәй һуғышҡа бөтөнләй тиерлек әҙер булмай. Александр беренсе лә, Сталин да ике осраҡта ла һуғыштың башланғанына ышанмайыраҡ тора, хатта улар ниндәйҙер сигенеүҙәргә барып, һуғышты кисектерергә лә тырыша. Әммә ике осраҡта ла һуғыш Наполеон ғәскәрен - Парижда, Гитлерҙы Берлинда тар-мар менән итеү менән тамамлана. Ике осраҡта ла ҡаршы тороусылар сафының яртыһынан күберәген Ҡояш тарафы кешеләре тәшкил итеүен баштарына ла килтермәгәндер, күрәһең, Наполеон менән Гитлер. Әлбиттә, илебеҙ хәрби көстәренең оло еңеүҙәрендә төрлө сәбәптәр, аңлатмалар барҙыр, әммә көнсығышты көнбайыштан килеп яулап булмай, тигән дәлилдең дә шул аңлатмалар араһында мөһим бер урында тороуын танымайса хәлебеҙ юҡ.

Күренекле яҙыусы Ғәлим Хисамовтың быйыл "Ағиҙел"-дең 8-9-сы һандарында баҫылған "Өн һәм һан" тигән роман-фаразында беҙ был ҡанунға тарихи планда бирелгән аңлатмаға юлығабыҙ. "Төньяҡтан көньяҡҡа, көнсығыштан көнбайышҡа табан бара тарихи тормош. Көньяҡҡа китеүселәр боронғо тыуған иле тураһында, беҙҙең боронғо еребеҙ төньяҡта, унда ун ай ҡыш, ике ай йәй, тип тә һөйләр булған..." тип әйтелә был хаҡта роман-фаразда. Артабан автор әҫәренең "Күсенеү ҡануны" тигән бүлегендә был һүҙҙәргә шундайын ҡыҙыҡлы аңлатмалар бирә: "Рифей тауҙарын ҡалдырып китеүселәр Һиндостанға ғына түгел, боронғо Месопотамияға ла күсә һәм шул ваҡыттарҙа шау-гөр килеп торған Шумер һәм Аккад дәүләттәрен дә күтәрә. Йәғни халыҡ тулҡын-тулҡын булып төньяҡ-көнсығыштан көньяҡ-көнбайышҡа бара. Тарихҡа күҙ һалығыҙ әле, көнбайыштан көнсығышҡа күсенгән берәр халыҡты табырһығыҙмы икән? Юҡ. Бындай хәл булған хәлдә лә, ул уңышһыҙ тамамланған. Мәҫәлән, ирандарҙың бер өлөшө Хазар диңгеҙе буйына, Алғы Азияға күскәндән һуң Уралға кире ҡайтмаҡсы була. Әммә был эштең аҙағы ҡыҙғаныс бөтә. Ҡайтырға тырышыусыларҙың күбеһе юлда һәләк була, Уралға аҙ ғына кеше әйләнеп ҡайта ала..."



Тимәк, күсенеү йүнәлеше киреһенсә булған осраҡта кешелек тарихында ла ырыу-ҡәбиләләрҙең һәр ваҡыт һәләкәткә тарыуына шаһитбыҙ. Алты быуаттан ашыу йәшәгән Ғосман империяһы миҫалы инде был ҡанундың дөрөҫ үтәлешен күрһәтә йәғни Византия империяһын ҡыйратып, үҙ империяһын төҙөүсе ғосманлылар Европаға көнсығыштан килгән. Ғосман империяһы (1299-1923) 623 йыл йәшәгәндән һуң, 1923 йылда Төрөк Республикаһына әүерелә. Дәүләттең исеме генә алмашына, ғосмандар төрөккә әүерелә, әммә Европаны яулаусы ҡәүем яулап алған еренән бер ҡайҙа ла китмәй.

Ғәлим Хисамов үҙ әҫәрендә ҡасандыр Ҡытайҙа йәшәгән көслө ҡәүем һаналған ҡалмаҡтарҙың фажиғәһен дә миҫал итеп килтерә һәм ҡыҙыҡлы һығымтаар яһай: "Ошондай уҡ яҙмыш кире күсенергә тырышҡан ҡалмаҡтарға ла әҙерләнгән була. Ҡалмаҡтар (ойроттар) XVII быуат аҙағында - XVIII быуат башында әлеге Ҡытайҙан, иркен ер эҙләп, Рәсәйгә күсенә. Әлбиттә, бында уларға бирәү ҙә ер бушатып көтөп тормаған... Ҡалмаҡтар әлеге Ҡалмағстан майҙанына ҡырғыҙҙар, кесе ҡырғыҙҙар (хәҙер ҡаҙаҡтар) йәшәгән ер аша ынтыла. Ҡырғыҙҙар уларҙы, ерҙе баҫып алырға киләләр, тип, һуғыш менән ҡаршылай. Күп кеше ҡырыла, бигерәк тә көтөлмәгән һөжүмдән ҡырғыҙҙар ныҡ юғалтыу кисерә. Һуғышҡа әҙерләнеп сыҡҡан ҡалмаҡтар аҙыраҡ ҡырыла. Рәсәй батшаһы Петр беренсе ҡалмаҡтарҙы әлеге Ҡалмағстан биләмәһенә һыйындыра. Петр үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, шулай эшләй. Һуғышсан ойроттарҙы баш бирмәҫ башҡа халыҡтарҙы, бигерәк тә башҡорттарҙы буйһондороуҙа файҙаланмаҡсы була ул... Әммә ҡалмаҡтар яңы урында шат тормош таба алмай. Ер ҙә аҙ, тәбиғәт шарттары ла ҡулай түгел. Өҫтәүенә, быларҙан зыян күреп өлгөргән ҡырғыҙҙар менән башҡорттар әленән-әле ҡарымта ҡайтара. Аптырағас, ҡалмаҡтар кире Ҡытайға ҡайтмаҡсы була. Әммә бөтәһе лә түгел. Халыҡтың бер өлөшө, хандың ҡарары менән ризалашмайынса, Рәсәйҙә ҡала. Быларҙың күсенергә йыйынғанын белеп ҡалған кесе ҡырғыҙҙар уларҙы юл буйына бик ныҡ ыҙалата, өҫтәүенә, малға ғына түгел, кешегә лә ризыҡ етмәй, йоғошло сир ҙә һағалап тора. Элекке тыуған иленә ойроттарҙың бик аҙы ғына ҡайтып етә. Унда ла уларҙың элекке ерҙәре ситтәр ҡулына күскән була. Мандый алмай былар. Элек ҡеүәтле һаналған халыҡ тарих күҙлегенән төшөп ҡала..."

Ҡалмаҡтар миҫалында беҙ, киреһенсә, көнсығыштан көнбайышҡа бер юлланып та, кире ҡайтыуы һөҙөмтәһендә тарих күҙлегенән төшөп ҡалыусы ҡәүемдең аянысла яҙмышына шаһитбыҙ. Әлбиттә, ойроттарға үҙ илендә күпселекте тәшкил итеүсе төп халыҡ та көн күрһәтмәгән.

Башта әйткәнебеҙсә, Башҡорт иленең көнсығыш, Ҡояш менән тоташыусы өлөшөн һаҡлаусы барын-табындар хаҡында тарихи әҫәрҙәр яҙыусы Спартак Ильясов мең тапҡыр хаҡлы: яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда. Ислам дине лә тап шул тарафта барлыҡҡа килеп, иң тәүҙә беҙгә килгән. Юғиһә, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре иң тәүҙә Болғарға барған тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Иң ябай логика күҙлегенән ҡарағанда ла, Өфөнән Ҡаҙанға Мәскәү аша бармайҙар бит. Бәлки, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең самолеты булғандыр ҙа, сәхәбәләрен Башҡорт иленең өҫтөнән Болғарға осорғандыр...

Әлбиттә, Башҡорт иленең көнсығышын яйлап яулай барған Рәсәй батшалығы. Унда ҡәлғәләр, нығытмалар, ҡалалар һалынған. Шул осорҙа башҡорт халҡының рухи короле атаҡлы Зәйнулла ишан Рәсүлев тап шул көнсығыш төбәктә "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен барлыҡҡа килтерә. Административ яҡтан Башҡорт иле менән көнсығыш араһындағы күпер яндырылғас асыла мәҙрәсә. Бында беҙ ишандың Башҡорт илен көнсығыш менән рухи күпер һалып тоташтырырға, ошоноң менән нисек булһа ла ул донъя менән бәйләнеште һаҡларға тырышыуына шаһитбыҙ. Әхмәтзәки Вәлидиҙең Башҡортостандан киткәндән һуң Төркөстан дәүләтен тергеҙер өсөн Урта Азиялағы хәрәкәттәрҙе ойоштороуы һәм етәкләүе лә шул бәйләнеште һаҡлап ҡалыу ихтыяжынан. Салауат батырҙың да тап ошо төбәктән сығыуы осраҡлы түгел. Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 43-44-се һандарҙа.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфөнөң "Иммунопрепарат" предприятиеһында ("Микроген" фәнни-производство берекмәһе" филиалы) яңы микробиологик лаборатория асылды. Яңы лабораторияла белгестәр килгән сеймалға, субстанцияларға, төрөү материалдарына микробиологик контроль үткәрә, туҡландырыу мөхите үҙенсәлектәрен тикшерә, шулай уҡ таҙартылған һыу һәм инъекциялар өсөн шыйыҡсалар күрһәткестәре мониторингын башҡара ала. Лаборатория халыҡ-ара GMP стандарттарына (фармацевтика препараттары етештереү ҡағиҙәләренә) ярашлы төҙөлгән. Проект Чехияның "FAVEA" фирмаһы менән берлектә тормошҡа ашырылған.

✓ М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында 12-13 декабрҙә үтәсәк "XXI быуат мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" IV халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итеү тамамлана. Конференцияла ҡатнашыу өсөн 10 ноябргә тиклем авторлыҡ белешмәһе ебәрергә кәрәк. Ғаризалар һәм тезистар haiet_bspu@mail.ru электрон почтаһы аша йәки түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450000, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, 3-а, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, 2-се корпус, 506 һәм 516-сы кабинеттар. Телефондар: (347) 276-26-14, 89659332192.

✓ Ошо көндәрҙә Ҡырғыҙстандың баш ҡалаһы Бешкәктә төрки телле илдәрҙең медиа-форумы үтә. Унда Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә, Гагаузия һәм Ҡырым автономиялы республикалары һәм башҡа илдәрҙән һәм төбәктәрҙән киң мәғлүмәт сралары етәкселәре һәм журналистар, Рәсәй исеменән төрки телле республикалар - Башҡортостан, Татарстан, Ҡарасәй-Черкес һәм башҡа төбәк журналистары ҡатнаша. Форумда традицион киң мәғлүмәт сараларын яңы медиаға үҙгәртеп ҡороу процестарын тикшереү күҙаллана.

✓ Рәсәй банкы сайтында Рәсәй һумының график символы өсөн интерактив тауыш биреү ойошторолған.Рәсәй банкының эш төркөмө һумдың график рәсемен билдә формаһында тәҡдим итеүсе граждандарҙың һәм ойошмаларҙың меңдән ашыу мөрәжәғәтен ҡараны, интернет-берләшмәләрҙең уй-фекерҙәрен өйрәнде. Һөҙөмтәлә иң йыш осраған биш вариант һайлап алынды. Тауыш биреүҙә ҡатнашыу өсөн тәҡдим ителгән биш билдәнең береһен һайларға һәм һайлауынды дәлилләргә кәрәк.

**“Башинформ”дан.**

***✓ Яңы төҙөлгән күп ҡатлы йорттарҙа фатирҙарҙы иҫәпкә ҡуйыу тәртибе үҙгәрҙе. Фатирға хоҡуҡты теркәү эшен хәҙер яңы төҙөлгән бинаның үҙе кадастр иҫәбенә алынып, теркәлгәнгә тиклем үк башҡарырға була.***



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ЮЛ АША ЯҢЫ ҮТКӘҮЕЛ

**Өфөлә Октябрь проспектындағы "Дан бульвары" йәмәғәт транспорты туҡталышы янында йәйәүлеләр өсөн яңы ер аҫты үткәүеле асылды. Юл инфраструктураһы объектын Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡараны.**

Дөйөм майҙаны 1450 квадрат метр булған ер аҫты үткәүелен төҙөүгә республика бюджетынан 156 миллион һум аҡса йүнәлтелгән. Тоннелдең киңлеге - 8 метр, оҙонлоғо 68,2 метр тәшкил итә. Ер аҫты үткәүеле заманса талаптарға ярашлы төҙөлгән, уның менән физик мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр ҙә файҙалана аласаҡ.

Ер аҫты объектын проектлаусы - "Гипростроймост Институты - Санкт-Петербург" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте. Подряд эштәрен "Уралмостострой" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең (Пермь) 123-сө күпер төҙөү отряды башҡарҙы.

# КӨТӨП АЛЫНҒАН ДАУАХАНА

**Өфөнөң "Көньяҡ" биҫтәһендә яңы балалар поликлиникаһы төҙөү планлаштырыла. Ул Зәйнәб Биишева һәм Зәһир Исмәғилов урамдары араһындағы биләмәлә урынлашасаҡ.**

Дөйөм майҙаны ете мең квадрат метр самаһы буласаҡ яңы балалар поликлиникаһы бинаһында участка табиптары бүлексәһе (10 педиатрия участкаһы педиатрҙары), 30 койкалыҡ көндөҙгө стационар, белгес-табиптар (офтальмолог, невролог, хирург, логопед) бүлексәһе урынлашасаҡ. Унда функциональ диагностика, нурлы диагностика бүлексәләрен, стоматология кабинеттарын, клиник-диагностика лабораторияһын, һауыҡтырыу бүлексәһен һәм башҡа подразделениеларҙы йыһазландырыу күҙаллана.

Поликлиниканы Өфө ҡалаһында 2014-2016 йылдарҙа типовой поликлиникалар һалыу комплексы проекты сиктәрендә төҙәйәсәктәр. Бынан тыш, Өфө хакимиәте башлығы ҡарары менән Амантай урамы, 7/1 адресы буйынса урынлашҡан 600 квадрат метр майҙанлы бина 2-се балалар поликлиникаһы идаралығы ҡарамағына тапшырылған, ремонттан һуң унда сменаһына 150 кеше ҡабул итерлек поликлиника филиалын урынлаштырыу күҙаллана. Төҙөлөш эштәре 2014 йылдың беренсе кварталында башланып, 2014 йылдың 3 кварталында тамамланасаҡ. Әлеге ваҡытта "Көньяҡ" һәм "Колгуев" биҫтәләрендә һигеҙ педиатрия участкаһында 7,5 мендән ашыу бала хеҙмәтләндерелә.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТОРЛАҠҠА ХОҠУҠТЫ ТЕРКӘҮҘӘ...



**Торлаҡҡа хоҡуҡты теркәү ҡағыҙәләрендә ошо йылдың 1 октябренән ҡайһы бер үҙгәрештәр көсөнә инде.**

***1.** **Яңы төҙөлгән күп ҡатлы йорттарҙа фатирҙарҙы иҫәпкә ҡуйыу тәртибе үҙгәрҙе.***

Росреестрҙа аңлатма биреүҙәренсә, фатирға хоҡуҡты теркәү эшен хәҙер яңы төҙөлгән бинаның үҙе кадастр иҫәбенә алынып, теркәлгәнгә тиклем үк башҡарырға була.

Яңы йорттан фатир һатып алыусылар өсөн был бик мөһим, сөнки ҡайһы ваҡыт өлөшсөләр үҙ фатирҙарына милекселек хоҡуғын теркәүҙе йылдар буйы көтөргә мәжбүр. Төҙөүселәрҙең йорт һалыуға хоҡуғын законлаштырыу йыш ҡына оҙаҡҡа һуҙыла. Айыруса ҡала властарының инвестиция контрактын башҡарыу мәсьәләһе буйынса төҙөүселәргә дәғүәләре булғанда ҡыҙәтелә был хәл. Бындай хәлдәрҙә яңы төҙөлөштәрҙән торлаҡ һатып алыусылар үҙ фатирҙарына милекселек хоҡуғын суд аша хәл итә торғайны.

***2.** **Фатир милексеһе үҙ ҡатнашлығынан тыш милке менән ниндәйҙер теркәү эштәре алып барыуҙы тыя ала.***

Һуңғы йылдарҙа фатир менән ялған нотариаль документтар файҙаланып, яуыз ниәттәрҙә эш итеү осраҡтары йышайҙы. Ялған документтар бик сифатлы кимәлдә эшләнгәнлектән, белгестәр уны ысынынан айыра ла алмай, шуға ла ялған ҡағыҙҙың һис бер ҡаршылыҡһыҙ үтеп китеүе лә бар, бер ниндәй техник экспертиза үткәрелмәй. Шуға күрә хәҙер милекселәргә үҙ хәүефһеҙлектәрен үҙҙәренә хәстәрләргә мөмкинлек бирелә. Бының өсөн милексегә Росреестрҙың теләгән бүлексәһенә килеп, үҙенең мөлкәте менән фәҡәт уның үҙе ҡатнашлығында эш итеүҙе һорап, ғариза яҙырға кәрәк. Был бигерәк тә фатирын яуыз маҡсаттарҙа файҙаланыу хәүефе булған милекселәргә, йәғни фатирға документтарын, паспортын юғалтҡан кешеләргә, яңғыҙаҡ пенсионерҙарға һәм өлөшләтә милекселек хоҡуғына эйә булғандарға ҡағыла.

***3.** **Фатирҙың элекке хужаһы уның милке менән эш итеүгә ҡаршы килеүен Росреестрға килеп белдерергә хаҡлы.***

Йылғыр аферистар фатирығыҙҙы йә бүлмәгеҙҙе һеҙҙең ҡатнашлыҡтан тыш һатып ебәргән осраҡта, шунда уҡ Росреестрға барып, был эшкә ҡаршы булыуығыҙҙы белдергәс, үҙ хоҡуҡтарығыҙҙы яҡлауҙы һорап, хоҡуҡ һаҡлау органдарына һәм судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

# ГРИПП ЯҢЫ ЙЫЛДА КИЛӘ




**Башҡортостанда вируслы ауырыуҙар эпидемияһы декабрь аҙағында - ғинуар йәки февраль урталарында көтөлә, тип хәбәр иттеләр "Башинформ" агентлығында үткәрелгән матбуғат конференцияһында БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы вәкилдәре.**

2013-2014 йылдарҙың ҡышына Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы Ерҙең төньяҡ ярымшары илдәренә өс төрлө вирус штаммдары менән вакциналар тәҡдим иткән. Вакциналар бер миҙгелгә генә эшләнә һәм киләһе йылына ҡулланылмай, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды СПИД һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш буйынса республика үҙәгенең баш табибы Рафаэль Яппаров.

Прививка кампанияһы сиктәрендә федераль бюджет аҡсаһы иҫәбенә республикаға 800 мең кешелек вакцина килтерелә. Тағы ла 18 мең дозаны БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы республика бюджеты иҫәбенән һатып ала. "Бөгөнгө көнгә халыҡтың дүрт проценты прививкаланған, тотороҡло эпидемик хәлдә тәьмин итеү өсөн 30 процент талап ителә. Төбәктә даими рәүештә халыҡтың дүрттән бер өлөшө прививка яһата", - тине Рафаэль Яппаров.

Табиптар коронавирус инфекцияһына күберәк иғтибар бүлә, әлегә унан прививкалар юҡ. Ул инфекция Яҡын Көнсығыш илдәренән "индерелә", шуға күрә унан килеүсе граждандар, шулай уҡ хажға барыусылар, эпидемиологик контролгә алына. "Ул ринит симптомы менән бик хәүефле киҫкен респиратор ауырыу. 2002 йылда уны Ҡытайҙа асыҡлағандан алып, был инфекциянан 30 илдә бер меңләгән кеше үлде. Быйыл 18 майҙа яңы коронавирус Сауд Ғәрәбстанында теркәлә - 81 йәшлек ҡатын ауырып китә. Яңы вирус патогенезы әлегә билдәһеҙ. Сир тиҙ үҫешә һәм бер нисә көн эсендә типик булмаған пневмонияға килтереүе мөмкин, ул саҡта үпкәләр "ирегән" кеүек була", - тип һөйләне БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш терапевы Венера Мостафина.

Табиптар, теләһә ҡайһы инфекцияларға ҡаршы тикшерелгән саралар ҡулланыу һөҙөмтәле, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды: улар - бер тапҡыр ҡуллана торған бирсәткәләр һәм битлектәр менән файҙаланыу, ҡулдарҙы йыуыу.

# ПАСПОРТ УРЫНЫНА - ПЛАСТИК



Тиҙҙән паспорттар электрон таныҡлыҡҡа алмаштырыласаҡ. Әлеге беҙ өйрәнгән паспорттарҙы биреү 2016 йылдың 1 ғинуарынан туҡтатыласаҡ. Уларға алмашҡа электрон чиплы пластик таныҡлыҡтар бирелә башлаясаҡ. Кеше хаҡындағы бөтөн мәғлүмәт шунда һалынасаҡ. Элек бирелгән ҡәҙимге паспорттар иһә 2016 йылдан һуң да ғәмәлдә ҡаласаҡ, ләкин бер кешегә бер юлы ошондай паспорт менән дә, пластик таныҡлыҡ менән дә файҙаланыу тыйыласаҡ.

# ЗАКОН ЯТЛАУҘАН ҒЫНА...

**Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы чиновниктарҙың яңы өлгөһөн "тәрбиәләргә" ҡарар итте.**

Халыҡ хеҙмәтселәре русса дөрөҫ һөйләшергә һәм яҙырға, Конституцияны һәм ришүәтселеккә ҡаршы закондарҙы яттан тиерлек белергә тейештәр, тип ҡуйыла мәсьәлә. Шунһыҙ эшкә алмаясаҡтар. Хеҙмәт министрлығының дәүләт хеҙмәткәрҙәренә талаптары тураһында законға төҙәтмәләрендә ошондай яңылыҡтар бар. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер "бонустар" ҙа буласаҡ икән. Мәҫәлән, әгәр берәй чиновниктың юғары белеме булмаһа, уға бушлай белем алырға мөмкинлек биреләсәк. Ә инде яңы эш башлаған йәш чиновниктарға тәжрибәле кәңәшсе-тәрбиәсе беркетеләсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда муниципаль райондар, ойошмалар һәм хеҙмәткәрҙәр араһында агросәнәғәт комплексы өлкәһендәге ярышҡа йомғаҡ яһалды. Ауыл хужалығы продукттары етештереүҙә юғары күрһәткестәргә өлгәшкәне өсөн 12 муниципаль район: Саҡмағош, Илеш, Дүртөйлө, Ейәнсура, Мәсетле, Балтас, Тәтешле, Краснокама, Дәүләкән, Стәрлетамаҡ, Бүздәк һәм Мәләүез - республика Хөкүмәте дипломдары менән билдәләнде. 2013 йылда БР-ҙың иң яҡшы ауыл хужалығы идаралыҡтары (бүлектәре) тип Күгәрсен, Ҡырмыҫҡалы һәм Бишбүләк райондары ауыл хужалығы идаралыҡтары танылды.

✓Өфө "Бала ғаиләлә тәрбиәләнергә тейеш" бөтә Рәсәй конкурсының баш ҡалалар категорияһында онлайн-тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса еңеүсе тип танылды. Конкурстың ойоштороусыһы булып Ауыр тормош шарттарында ҡалған балаларға ярҙам итеү фонды сығыш яһай. Башҡортостан баш ҡалаһы 5221 тауыш йыйҙы. Быйыл конкурста Рәсәй Федерацияһының 62 субъектынан 167 ҡала ҡатнашты. Быltыр ҙа Өфө онлайн-тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса "Етемдәрһеҙ ҡала" конкурсында абсолют еңеүсе тип танылды, ә социаль етемлекте иҫкәртеүгә йүнәлтелгән сараларҙы һөҙөмтәле тормошҡа ашырған Рәсәй ҡалалары рейтингында РФ субъекттарының административ үҙәктәре булған ҡалалар араһында тәүге өсәү иҫәбенә инде.

✓Италияла WTKA хәрби оҫталыҡ буйынса донъя чемпионаты уҙҙы. Ярыштарҙа БР Хәрби оҫталыҡ федерацияһы Президенты, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостанда физик культураны һәм спортты үҫтереү буйынса координаторы, кикбоксинг һәм хәрби оҫталыҡ буйынса ун дүрт тапҡыр донъя чемпионы Вил Ғабдуллин ҡатнашты. "Берҙәм Рәсәй" ағзаһы ҡорал ҡулланып хәрби ярыштарҙа дөйөм алғанда 10 алтын миҙал яуланы. Чемпионатта донъяның 40 иленән биш меңләгән спортсы ҡатнашты.

✓Башҡортостандың Архив эштәре буйынса идаралыҡ эштәрен 15 йыл дауамында етәкләүсе Әхмәт Хисмәтуллин пенсияға китте. Ведомство етәксеһе вазифаһын башҡарыу архив идаралығы начальнигы урынбаҫары Илфат Ғәлләмовҡа йөкмәтелде.

✓12-14 ноябрҙә Өфө ҡала Мәҙәниәт һарайында Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, БР "Медтехника" дәүләт унитар предприятиеһы, "БашЭКСПО" Күргәҙмә үҙәге тарафынан ойошторолған, сит илдәр вәкилдәре ҡатнашлығында "Медицина-2013" махсус форумы үтәсәк.

✓ *Әгәр эшегеҙ алға китһен тиһәгеҙ, ышаныслы кешеләр менән танышығыҙ, уларҙы үҙегеҙҙең бизнесығыҙға ылыҡтырығыҙ. Йәнә, дуҫтар менән бергәләп эшҡыуарлыҡҡа тотонмағыҙ - араларығыҙ һыуыныр, эшегеҙ тотҡарланыр.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ЙӘШ МИЛЛИОНЕР КӘҢӘШЕ,

## йәки Дуҫтар менән эшҡыуарлыҡ булдырмағыҙ



Тәүге тапҡыр аҡса эшләп ҡараған саҡта миңә 10 йәш ине. Әле 23 йәштәмен. Ул саҡта мин нәшриәттәрҙән гәзиттәр һатып алып, велосипедым менән йөрөп, уларҙы автомобиль туҡталҡаларында, бәләкәй баҙарсыҡтарҙа һата торғайным. Компьютерҙар барлыҡҡа килгәс, дуҫымдың компьютерынан дискыларға фильмдар яҙҙырып, мәктәптә тарата башланым. 10-сы синыфта уҡығанымда әсәйем бер танышының компьютерын йүнәтеп биреүемде һораны. Ул мәлдә мин компьютерҙы аҙмыкүпме белә инем инде. Барып, йүнәтеп биргәйнем, теге кеше: "Миңә сайт кәрәк ине, эшләй алаһыңмы?" - тип һораны. Мин: "Әлбиттә, эшләй алам!" - тип яуапланым. Ысынында, сайт эшләү минең өсөн бик үк аңлашылып етмәгән "ҡара урман" ине әле. Шунда уҡ яҡындағы киоскынан "Нисек сайт эшләргә?" тип аталған бер журнал һатып алдым. Ике аҙна үткәс, был яңы һөнәр миңә тәүге 5 мең һумлыҡ килем килтерҙе.

Шул көндән алып сайттар эшләүгә ылығып киттем һәм оҙаҡламай үҙ сайтымды ла булдырҙым. Бер ҡайҙа реклама бирмәһәм дә, "йүкә телефон" аша кешеләр миңә килә торҙо. Үҙ эшемде сифатлы һәм ваҡытында атҡарырға тырышыуым күптәрҙе ылыҡтырҙы булһа кәрәк. Университеттың 1-3 курстарында уҡығанда булды былар. Йәғни, уҡып та, эшләп тә өлгөрҙөм. Ҡайһы бер айҙарҙа килемем 100 мең һумдан артып китә ине. 4-се, 5-се курстарҙа бөтөн эшкә бер үҙем өлгөрә алмай инем, шуға үҙемә ярҙамсылар йәлеп итә башланым. Шулай итеп, бәләкәй генә командабыҙ барлыҡҡа килде. Клиенттар менән аралашыуҙы һәм эште контролдә тотоуҙы үҙ өҫтөмә алдым.

Әйтергә кәрәк, тәүге уңыштарҙан "баш әйләнгән" саҡтар ҙа булды. Мәҫәлән, оригиналь япон сәғәттәре һатыуҙы ойоштороп, бер аҙ аҡса эшләгәндән һуң, дуҫтар алдында маһайып алыу өсөн бер төнгө клубты бер төнгә ҡуртымға алып, байрам ойоштorҙоҡ. Яңы ғына күтәрелеп килгән ойошмабыҙҙың аҡсаһын быйндай сараға сарыф итеүҙең бик ныҡ файҙаһыҙ икәнлеген һуңынан ғына аңланыҡ. Шулай ҙа ғүмерлеккә һабаҡ алдыҡ.

Эпплдың тәүге "айфон"ы килеп сыҡҡас, дуҫым менән бергәләп ошо ҡыйбатлы телефондарҙы АҠШ-та йәшәүсе бер танышыбыҙ аша һатып алып, үҙебеҙҙең ҡалаға ҡайтарып, һата башланыҡ. Һөҙөмтәлә, бер-ике ай эсендә һәр беребеҙ 150-шәр мең самаһы аҡса эшләп алдыҡ. Артабан АҠШ-тағы танышыбыҙ Рәсәйгә ҡайтты ла, беҙ был эшебеҙҙе лә туҡтатырға мәжбүр булдыҡ. Мажаралар бының менән генә бөтмәгән икән. Сайттар, фотографтар һәм моделдар менән шөғөлләнә башлағайныҡ, был бизнесыбыҙ ҙа уңышлы булып сыҡты. Көрсөк башланғас, был шөғөлөбөҙ аҡсаны аҙ килтерә башланы, шуға күрә, тағы ла икенсе төрлө эшкә күсергә тура килде. Был юлы башҡа магазиндарҙағы тауарҙарға ҡарағанда 30 процентҡа осһоҙораҡ булған автомобиль майҙары һатыу буйынса интернет-магазин астыҡ. Осһоҙ булғас, водителдар араһында беҙҙең майҙарҙың даны тиҙ арала таралды. Бөгөн меңгә яҡын даими һатып алыусыбыҙ бар, интернет-магазиныбыҙ яҡшы эшләй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күреүегеҙсә, миңә әллә нисәмә эш башларға тура килде. Уңышһыҙлыҡтар ҙа булды, уларын да йәшермәйем. Шулай ҙа, әгәр эшегеҙ алға китһен тиһәгеҙ, ышаныслы кешеләр менән танышығыҙ, уларҙы үҙегеҙҙең бизнесығыҙға ылыҡтырығыҙ. Йәнә, дуҫтар менән бергәләп эшҡыуарлыҡҡа тотонмағыҙ - араларығыҙ һыуыныр, эшегеҙ тотҡарланыр. Дуҫтарҙы, әлеге лә баяғы, эшҡыуарҙар араһында табығыҙ. Аҙыраҡ һөйләп, күберәк эшләгеҙ һәм төнгө клубтарҙа аҡса туҙҙырмағыҙ. Бөтөнләй эсмәгеҙ.**

**Илья ХАБАДАЕВ.**
**(Интернеттан).**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ТҮЛӘП ДАУАЛАНҺАҒЫҘ

**Ҡиммәтле операция өсөн һалым айырмаһы түләтеүгә ниндәй документтар кәрәк?**

Иң тәүҙә яһалған операцияның РФ Хөкүмәте Ҡарары менән 19.03.2001 йылда раҫланған махсус исемлектә бармы, юҡмы икәнлеген асыҡларға кәрәк буласаҡ. Әгәр булһа, һеҙ дауаланыуға түләнгән сумманың 13 процентын (әммә медицина хеҙмәттәренә аҡса сарыф ителгән йыл буйына түләнеп килгән һалым суммаһынан да артыҡ булмаған күләмдә) кире ҡайтара алаһығыҙ. Лимит һеҙҙең эш хаҡына бәйле.

Ҡиммәтле операция өсөн социаль һалым айырмаһына хоҡуғығыҙҙы раҫлауға түбәндәге документтар талап ителә:

- эш урынынан килемегеҙ хаҡында белешмә;
- медицина хеҙмәттәре өсөн аҡса түләгән документтарығыҙ;
- медицина хеҙмәттәре күрһәтеү тураһында килешеүҙең күсермәһе;
- һалым органдарына тапшырыу өсөн медицина хеҙмәттәренә түләү тураһындағы белешмә;
- медицина хеҙмәттәре һәм дауаланыу өсөн ире йә ҡатыны түләгән хәлдә никах тураһында таныҡлыҡ күсермәһе;
- ата-әсәһенең дауаланыуы өсөн аҡса тотонған һалым түләүсенең тыуыу тураһында таныҡлыҡ күсермәһе;
- 18 йәшкә тиклемге балаһының дауаланыуы өсөн аҡса сарыф иткән һалым түләүсенең ошо балаһының тыуыу тураһында таныҡлығы.

## КИЛЕМДӘН ҺАЛЫМ ТЕЙЕШ

**Өйҙә хеҙмәттәр күрһәтәм. Бының өсөн һалым түләмәгән хәлдә миңә яуаплылыҡ янаймы?**

Һеҙҙең шөғөл формаль рәүештә эшҡыуарлыҡ төрөнә ҡарай, шуға күрә һеҙгә һалым органына барып, шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлеү кәрәк. Шуға ярашлы, килемегеҙҙән һалым түләргә, отчет төҙөргә һәм башҡа бурыстарҙы башҡарырға тура киләсәк. Шуға өҫтәп, һеҙ Пенсия фондына ла түләп барырға һәм санитар нормаларҙы үтәргә тейешһегеҙ.

Шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлмәгән хәлдә, һеҙҙең эшмәкәрлек законлы түгел, ә был иһә административ йә булмаһа енәйәт яуаплылығы менән янай. Шуға күрә лә бер көн килеп, һеҙҙең һалым, хоҡуҡ һаҡлау йә санитар органдар менән аңлашылмаусанлыҡ килеп тыумаҫ тип бер кем дә ышандыра алмай.

## ҮҘ ХАҠЫНАН КӘМ БУЛҺА

**Бер йыл элек 400 меңгә машина һатып алғайным, хәҙер уны 300 меңгә һатып, был аҡсаны 560 меңлек яңы машина өсөн тәүге взнос итеп түләргә уйлайым. Иҫкеһен һатҡан өсөн минән һалым тейешме икән?**

Юҡ. Милкегеҙҙә өс йылдан да кәм тотонмаған машинағыҙҙы һатҡан өсөн һалым түләтелмәй, сөнки һеҙ унан килем алмағанһығыҙ (РФ Һалым кодексының 217-се статьяһы).

## ДОКУМЕНТ АНЫҠЛЫҠТЫ ЯРАТА

**Фатир хосусилаштырыла һәм шундуҡ һатыла. Милкебеҙҙә өс йылдан кәм булған һәм һатыу-һатып алыу килешеүендә хаҡы 1 миллиондан аҙыраҡ күрһәтелгән фатирҙы һатҡан өсөн һалым түләтеләме?**

Һатыу хаҡы 1 миллиондан кәм булған осраҡта һалым түләргә кәрәкмәй, тик шуны иҫтә тотоғоҙ: был сумманы һеҙ һалым түләмәҫ өсөн генә күрһәтһәгеҙ, ә распискала икенсе сумма булһа һәм, әгәр аҙаҡ алдашыу факты асыҡлана ҡалһа, һеҙҙе проблемалар көтә.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындарға тоҙ ултырһа

❖ Кистән ҡайнар һыулы стаканға шыршы тубырсығын һалып ҡалдырырға һәм иртән һүрән утта 5 минут самаһы ҡайнатырға. Тубырсыҡтарҙы алып ташларға. Ҡайнаған һыу 200 грамм булырға тейеш, аҙыраҡ булғанда, һыу өҫтәргә. Шул ҡайнатманы көнөнә 2 мәртәбә 100-әр грамм эсергә.

❖ Ит турағыстан үткәрелгән 200 грамм һарымһаҡ, 500 грамм керән һәм 500 грамм лимонды 1,5 литр ҡайнаған һыуға һалып, 1 литр бал ҡушығыҙ. Шул ҡайнатманы иртәле-кисле 1-2 ҡалаҡ эсергә.

### Тырнаҡтарҙағы бәшмәк

❖ Ҡайын утыны көлөнә ҡайнар һыу һибергә һәм 30 минуттан шунда ҡулдарҙы 15 минутҡа тығып ултырырға. Көлдөң ҡыҙыу булыуы мөһим түгел. Бер аҙнанан бәшмәктең эҙе лә ҡалмай. Бәшмәктәр яңынан сыҡмаһын өсөн ҡул-аяҡтарҙы ҡайын көлөндә 3 көнгә бер тоторға.

### Баш мейеһе һелкенһә

❖ Берәр ҡалаҡ борос һәм бөтнөккә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут тирәһе ҡайнатырға. Ҡайнатманы иртәле-кисле яртышар стакан эсергә.

### Радикулит

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы сөгөлдөрҙө ҡырғыстан үткәрергә, һутын икенсе һауытҡа һығып алырға. Ҡалған ҡуйы һығынтыһына 1 ҡалаҡ таҙа кәрәсин ҡушып болғарға. Шуны берәй салфеткаға төрөп, ауыртҡан урынға ҡуйырға һәм йылы әйбер менән урарға. Тәүҙә яндырған кеүек, аҙаҡтан йылы ғына булып торор. Был дауаны 2 тапҡыр эшләгәс, радикулиттан ҡотолорһоғоҙ. Дауаны төнгөлөккә эшләгеҙ.

### Картуф

❖ Ашҡаҙан сей яраһында, гастрит булғанда, әселек юғары булһа йыуып таҙартылған картуфты ҡырғыста ҡырып, һутын һығып алырға һәм шунда уҡ ашарҙан алда 30 минут алда көнөнә 2-3 мәртәбә 100-130 мл эсергә. Дауа 10 көн дауам итһен, һуңынан 10 көн ял иткәс, тағы ҡабатлағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ә шулай ҙа дәреслек авторҙары уйлар әле, тип көтөп ултырмайбыҙ, бындай әҫәрҙәрҙе, мәҡәләләрҙе үҙебеҙ табырға, дәрестәребеҙҙе башҡа төрлө саралар менән ҡыҙыҡлыраҡ итергә тырышабыҙ.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Осоҡтан им

**Шеш биҙен имләү.** Ҡултыҡ аҫтында шеш биҙе була. Ул имсәк ауырыуынан тарала. Ышаныуҙар буйынса, был ауырыу ендән килә тиҙәр. Төнөн, әгәр мөрйә асыҡ булһа, йоҡлаған кешенең яланғас урындарын ен төкөрөп ялай. Элек әбейҙәр өшкөрөп, ауыртҡан ергә тоҙ һалып, ауыҙҙарына һыу уртлап бөркөп, шеште ҡыҙыл сепрәккә төкөрөп имләгәндәр.

**Бетеү тағыу.** Тәнгә шешек-маҙар, ҡутырфәлән сыҡһа, бетеүҙе күлдәккә тағып ҡуйғандар.

## Йыланғараҡ имләү

**Йылан тиреһе име.** Тәнгә сыҡҡан ауырыушештәрҙе "йыланғараҡ" тип атағандар. Бындай шештәрҙе дауалау өсөн йылан тиреһе япҡандар, йылан күҙен йылан тиреһенең магик көсө генә юҡ итә ала, тип уйлағандар. Ҡайһы саҡта йылан тиреһен мейестә яҡшылап киптергәндәр, унан һуң төйөп, он рәүешенә килтергәндәр һәм шуны шешкә һипкәндәр.

**Тилебәрән име.** Йыланғараҡ - шеш, тырнаҡ аҫтындағы күпертке. Йыланғараҡ булһа, тилебәрән төтөнөн төтәтәләр йәки ҡауы алынған йылан тиреһен (йылан ҡабығын) ҡуялар, йылытылған ҡайраҡ менән һыҙлаған урынды еңелсә ҡыҫып, эренен сығаралар.

**Ҡайраҡ менән имләү.** Көйәнтә аша атларға ярамай, ҡайраҡ сире ҡағыла. Уны ҡайраҡ менән имләйҙәр. Берәй ҡайраҡҡа ҡайраҡ менән төртөп-төртөп ала, икенсеһе:

- Ни буяған? - тип һорай.

- Ҡайраҡ булған, ҡайраҡ имләйем, - ти имсе. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан: "Имеңтомоң шул булһын!" - тип ҡайраҡты ташлайҙар.

**Ҡайраҡ менән өшкөрөү.** Ҡайраҡ булһа, "Ҡолһоуалла"ны уҡып, бысаҡ үткерләй торған ҡайраҡты төртөп-төртөп өшкөргәндәр.

**Ҡайраҡҡа күсереү.** Ҡайраҡ ауырыуы өҫтөндә ҡайраҡ йөрөтәләр һәм:

*Ҡайраҡ, ҡайраҡ, кит йыраҡ, кит йыраҡ.*
*Кил, ҡайраҡ, Кил, ҡайраҡ!*

-тип имләйҙәр. Шулай тиеүгә, "ҡайраҡ" (ҡултыҡ аҫтына сыға торған ҡаты шеш) ябай ҡайраҡҡа әүерелә, имеш. Ә аҫтында ҡайраҡ булмаһа, ҡыяр булһа ла ярай. Иң мөһиме, исемдәре бер төрлөрәк яңғыраштa булырға тейеш. Шул саҡта ғына ауырыу-шеш икенсе әйбергә күсә ала, имеш...

**Сиртмә сыйыу.** Сиртмә булһа, бысаҡтың йөҙөн өҫкә ҡаратып, шешекте уңға-һулға сыйып сығалар. Аҙаҡтан һаҡлыҡ менән бысаҡты өс тапҡыр шешкән урынға төртәләр һәм сир ергә күсһен өсөн бысаҡты ергә һуғып алалар. Сыйғанда ошондай доға уҡыла:

*Ни сыям? Сиртмә сыям.*
*Тфү! Сүбхәналла! Лә иләһи иллә-илаллаһ,*
*Мөхәммәт рәсүлуллаһ.*

Унан һуң "Ҡолһоуалла" уҡыла. Имләү өс тапҡыр ҡабатлана.

**Сиртмә әпсендәре.**

*Бур томтом, битенә ҡара яҡтым,*
*Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты,*
*Һин дә ҡайт! Ни сыяһың?*
*Аҡ сиртмә, аҡ сиртмә, аҡ сиртмә.*
*Урыныңа ҡайт! Урыныңа ҡайт!*
*Тфү! Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Ни сыяһың? Сиртмә сыям.*
*Бур томтом, битенә ҡара яҡтым.*
*Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты,*
*Һин дә ҡайт.*
*Бер имләйем, берҙән ҡайт!*
*Тфү-тфү!*
*Шифаһын бир!*
*Сәбәп минән булһын,*
*Сихәт Алланан булһын!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...

# ИҢЕБЕҘҘӘ...

## оло яуаплылыҡ



**Баш ҡалала, уның рус мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу, башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе ниндәй кимәлдә булыуы тураһында үҙемдең күҙәтеүҙәрем, ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килә.**

Һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләренә ҡағылышлы һөйләшеүҙәр йыш булып тора. Был өлкәлә төрлө күрһәтмә-ҡарарҙар ҙа ҡабул ителә. Әлбиттә, рәсми даирәләрҙән төшкән бер ҡарар ҙа эҙһеҙ үтмәй, әллә нисә төргә үҙгәртелгән уҡытыу методтары уҡыу-уҡытыу процесына әленән-әле үҙгәрештәр индерә, хатта эшебеҙҙе арыу ғына ҡатмарлаштырып та ҡуя. Ләкин беҙ бар ауырлыҡтарҙы ла еңергә өйрәнергә тейешбеҙ. Сөнки башҡорт теле яҙмышы беҙҙең дә ҡулдарҙа. Хәйер, башҡорт теле дәрестәрен уҡытыусыға бер ваҡытта ла еңел булмағандыр, моғайын...

Эшенә мөкиббән киткән, уҡыусыларға ла, үҙенә лә талапсан ҡараған уҡытыусы өсөн һәр дәрес, һәр сығыш - үҙенә күрә бер һынау инде ул. Быны рус мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен алып барған һәр уҡытыусы яҡшы белә. Тик беҙ ауырлыҡтарҙан ҡурҡып тора торғандарҙан түгел - рус мәктәптәрендә белем алыусы 6-7 йәшлек сабыйҙарға хәлебеҙҙән килгәнсә башҡорт һөйләү телен өйрәтәбеҙ. Ғөмүмән, был йәштәге балаларҙы уҡытыуҙы мин иң яуаплы эштәр рәтенә ҡуйыр инем. Баланың мәктәп, донъя менән ныҡлап танышыуы тап ошо мәлдә башланыуын, өҫтәүенә, быға тиклем башҡорт телен "аҙыҡ-түлек", "рәхмәт", "рәхим итегеҙ" һүҙҙәре кимәлендә сала-сарпы ғына аңлаған бала күңелен уйлауҙы, унда телебеҙгә ҡарата кире мөнәсәбәт тыуҙырыуҙан һаҡланыуҙы, балаларҙы үҙ фекерен башҡортса әйтеп бирергә өйрәтеүҙе мөһим талаптарҙан һанайым.

Уҡыу техникаһын үҫтереү һәм балаларҙы әҙәби китап уҡыуға ылыҡтырыу ҙа үҙәк урында беҙҙең өсөн. Әҫәрҙәргә килгәндә, рус кластары өсөн сығарылған дәреслектәрҙә ябай һәм ҡыҙыҡлы итеп бирелгән бәләкәйерәк текстар күберәк урынлаштырылһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Юғиһә, уҡытыусылар үҙ-ара һөйләшкәндә бындай текстар аҙыраҡ икәнен билдәләй. Дәреслектә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр күп булһа, уҡыусы уларҙы өйҙә үк уҡып бөтә бит инде ул. Ә шулай ҙа дәреслек авторҙары уйлар әле, тип көтөп ултырмайбыҙ, бындай әҫәрҙәрҙе, мәҡәләләрҙе үҙебеҙ табырға, дәрестәребеҙҙе башҡа төрлө саралар менән ҡыҙыҡлыраҡ итергә тырышабыҙ.

Мин үҙем, мәҫәлән, бәләкәйерәк шиғырҙарға күңелле генә берәй әҙер көйҙө һалам да, балаларға йырлап күрһәтәм. Шулай иткәнгә күрә, балалар уны тиҙерәк хәтерендә ҡалдырыуын күҙәткәнем бар. Тағы, әҫәрҙәрҙән өҙөктәрҙе уҡыусыларҙан сәхнәләштереү ҙә балаларҙың күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу осҡондары ҡабыҙырға ярҙам итә. Бер ыңғайҙан сәхнәлә үҙен нисек тоторға, сығыш яһарға ла өйрәнә уҡыусылар. Әкиәттәргә иллюстрациялар эшләтеү әҫәрҙең йөкмәткеһен еңелерәк хәтерләргә ярҙам итә, өҫтәүенә, уларҙың ижади фекерләү ҡеүәһен дә үҫтерә. Һөҙөмтәлә, башҡорт телен яңы өйрәнә башлаған уҡыусының тел ярҙамында әйтеп бирә алмаған ҡайһы бер фекерҙәре лә ошо һүрәттәр ярҙамында еткерелә.

Хәҙерге инновацион технологиялар тураһында ла әйтеп китеү кәрәктер. Компьютер, интернет донъяһын яҡшы төшөнгән бала менән "компьютер" телендә лә иркен аралашырға тейеш уҡытыусы. Был йәһәттән һуңғы йылдарҙа мәктәптәрҙең матди-техник базаһы нығыныуы шатландыра.

Эйе, һәр эштә лә ҡыйынлыҡтар, ҡаршылыҡтар осрап тора. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт теле уҡытыусыһы үҙ иңендәге яуаплылыҡты тойоп, киләсәккә ҙур өмөттәр, маҡсаттар ҡуйып, иң һыҙғанып эшләргә тейеш. Йәш коллегалар ошо хаҡта онотмаһын ине.

**Шәүрә ИСҠУЖИНА,**
**Өфө ҡалаһының 5-се лицейы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

# ҺҮҘЕБЕҘҘЕ ҠАЙҘА ТӨБӘЙЕК?

**Өфө ҡалаһы мәктәптәренең башҡорт теле уҡытыусылары ауыл, район мәктәптәрендә дәрес биргән коллегаларына ҡарағанда икеләтә көсөргәнеш, яуаплылыҡ менән эшләй, тиһәм, моғайын, берәү ҙә ҡаршы килмәҫ. Беҙгә бит туған телен йүнләп белмәгән ата-әсәләрҙе лә, уҡыусыларҙы ла башҡортса һөйләштерер, бай милли мәҙәниәтебеҙгә ылыҡтырыр өсөн тырышырға тура килә. Етмәһә, милли гимназияға башҡорт телен өйрәнәбеҙ тип килгән уҡыусылар араһында туған телгә ҡарата битарафлыҡ тойоп, күңел ҡырыла.**

2010 йылдың 22-29 октябрендә Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты тарафынан "Туған телдәрҙе һәм милли йолаларҙы һаҡлап ҡалыуҙа ғаиләнең роле" тигән интернет-конференция үткәрелде. Шундай актуаль тема буйынса фекер алышыусылар һаны бик аҙ булыуға ҡарамаҫтан, унда тормошҡа ашырырлыҡ матур тәҡдимдәр яңғыраны. Дим районы 123-сө лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Миңһылыу Абдуллина, мәҫәлән, хөкүмәт кимәлендә ҡаралырҙай тәҡдимдәр индерҙе. Шул тәҡдимдәрҙең берникәһен иҫкә алып китәм:

- башҡорт ата-әсәләренең аңын, рухын уятырҙай төрлө бәйгеләр ойоштороу;
- башҡорт ғаиләләре араһында "Телгә тоғро ғаиләләр" конкурсы булдырыу;
- балаларына башҡорт халыҡ педагогикаһына таянып тәрбиә биргән ата-әсәләрҙе "Беҙҙең заман геройҙары" тигән миҙал менән бүләкләү;
- туған телгә тоғро ғаиләләрҙең аралашыуын, бергәләп ял итеүен, сәйәхәттәрен ойоштороу.

Ләкин был тәҡдимдәрҙе етәкселәребеҙ ҙә, зыялыларыбыҙ ҙа, хөрмәтле депутаттарыбыҙ ҙа, ата-әсәләр йәмәғәтселеге лә иғтибарға алманы.

Өфөлә йыл һайын "Һөтлө ил", "Сәскәләр байрамы", "Туй күлдәге", "Коляскалар байрамы" һ.б. конкурстар үткәрелә. Ошо ғаилә байрамдарын ойоштороусы Өфө ҡала округы хакимиәте, исмаһам, бер номинацияны телде яҡшы белгән башҡорт ғаиләләре араһындағы берәй бәйгегә арнай алмаҫ инеме икән? Бындай тәҡдим Өфөләге башҡорт теле уҡытыусыларының күңелендә әллә ҡасандан өлгөргән. Был тәҡдим киң мәғлүмәт сараларында да яҡтыртылды. Тик беҙҙе ишетеүсе генә юҡ.

Бына шулай бер-беребеҙҙе ишетмәгәс, Үҙәктән, әллә ҡайҙан диңгеҙ аръяғынан килгән сәйәсәт ипләп кенә халыҡтың аңын томалай. Эш паспорттағы "милләт" тигән графаны төшөрөп ҡалдырыуҙан башланды. Хәйләкәр сәйәсәт мәғариф тураһындағы законға ла килеп инде. Башҡорт телен уҡытыу-уҡытмау хәҙер мәктәп етәкселеге ихтыярына ҡайтарып ҡалдырылды. Директоры рус йәки башҡа милләттән булған мәктәптәрҙә телебеҙҙе уҡытыу мотлаҡ алып барылыры шулай уҡ икеле.

Бөгөнгө көндә актуаль мәсьәләләрҙең береһе - башҡорт телен донъя кимәленә күтәреү. Һәммәбеҙ ҙә яратып өлгөргән "Бәйләнештә" интернет селтәрендә күптәр үҙ-ара аралаша, яңылыҡтар уҡый, дуҫ-таныштарының тормошон күҙәтеп бара. Шуныһы шатлыҡлы: селтәрҙә хәҙер "VK.com башҡорт телендә" тигән төркөм барлыҡҡа килде (адресы - vk.com/vkbashkort). Уның етәксеһе Илдар Кинйәбулатов белдереүенсә, "Бәйләнештә" социаль селтәре башҡортсаға тәржемә ителә. Интернет селтәрендә башҡортса аралашыу булдырылһа, бының көсөн үҙегеҙ ҙә аңлайһығыҙҙыр.

Бик күп илдәр, республикалар милли телен дәүләт теле булараҡ нығытҡан. Уларҙың һәр береһендә дәүләт телен яҡлау һәм үҫтереү буйынса махсус программалар ғына түгел, ә махсус рәсми органдар бар. Ә беҙҙә ундай орган юҡ. Ә ниңә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа булһа ла дәүләт телдәрен яҡлау һәм үҫтереү буйынса махсус комитет төҙөмәҫкә? Юҡһа, ҡайһы саҡта телебеҙҙе яҡлап әйтер һүҙебеҙ ҡайҙа төбәлергә белмәй, һауала аҫылынып ҡала.

**Фәриҙә МИҺРАНОВА,**
**Өфөнөң М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*✓ Буласаҡ һәйкәлдең проекты әҙер. Уны ул триумф аркаһы итеп күҙаллай. Ғөмүмән, ҡыйыу яугирҙәрҙе сағылдырыу өсөн был алым донъяның күп илдәрендә ҡулланыла. Мәғәнә яғынан да унда күпте күрһәтергә, аңлатырға була.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**XVIII быуаттың 30-40-сы йылдары башҡорт тарихының бик ҡанлы, бик фажиғәле осоро: властарҙың аңлайышһыҙ сәйәсәте, ғәйепһеҙҙәрҙе ғәйепләү, уларға яуап итеп бер-бер артлы ҡупҡан ихтилалдар, ихтилалдарҙы ҡаты баҫтырыу, башҡорттарҙы терелэй яндырып, ауылдарынан көл генә торғоҙоп ҡалдырған Тевкелев (Тәфтиләү) кеүек мәкерле кешеләрҙең яуызлыҡтары. Ләкин нимәнән башланып китә был сыуалыштар? Уларҙың эске һәм тышҡы сәбәптәре ниҙә? Рәсәй дәүләтенең башҡорттарға ҡарата сәйәсәтенең үҙенсәлеге нимәлә? Был һорауҙарға яуапты тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты Марат Миңлеғәле улы ЗӨЛҠӘРНӘЕВ сығышында табырһығыҙ.**



# ИХТИЛАЛДАРҒА...

## мәжбүр иткән сәбәптәр

### Кириллов экспедицияһы

XVIII быуаттың 30-40 йылдарында барған тарихи процестар хаҡындағы бөтә документтар сенатта йыйыла. Ғалим һәм дәүләт эшмәкәре Иван Кириллович Кириллов улар менән таныш була. Кириллов математика, астрономия, иҡтисад фәндәре менән шөғөлләнә. Хатта "Цветущее состояние российского государства" тигән хеҙмәтен дә яҙа. Берингтың 1-се һәм 2-се экспедицияларын әҙерләүҙә ҡатнаша. Үҙенең дә экспедиция ойоштороп, уны етәкләп, яңы ерҙәр асып, үҙен Колумб итеп хис итеү ниәте була. 30-сы йылдарҙа ҡаҙаҡтар Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, Кириллов батшабикәгә был төбәккә ҡағылышлы үҙ проектын яҙып бирә. Был проект "Ҡырғыҙ батша урҙалары хаҡында аңлатыу" ("Изъеснение о киргизских царских ордах") тип атала.

Хеҙмәттең беренсе өлөшөндә һүҙ Рус дәүләтенең көнсығыштағы пландары хаҡында бара. Ул план буйынса, тәү сиратта Һиндостан, Фарсы илдәре менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу күҙаллана. "Һеҙ күреүегеҙсә, - тип яҙа Кириллов, - Голландия Һиндостан менән мөнәсәбәттәр булдырыр өсөн ҙур караптар төҙөй, ҙур сығымдар йәлеп итә, ә беҙ ошо ҡаҙаҡ далалалары аша шунда барып етә алыр инек. Был финанс яҡтан күпкә отошлораҡ". Был хеҙмәттә Башҡортостан хаҡында ла иҫкәрмәләр бар. Автор Башҡортостанда бик күп ҡаҙылма байлыҡтар барлығын, шулай уҡ Илек тоҙон Рәсәйгә күсереү кәрәклеген иҫкәртә. Ошо тәҡдимдәр менән Анна Ивановнаға мөрәжәғәт итә лә инде.

Татищев, Волынский тәҡдим иткән проекттар дәүләт етәкселеге тарафынан ҡабул ителмәй. Сөнки улар күп сығымдар талап итә. Ә Кирилловтың проекты күп сығымдар талап итмәй. "Хәрби отрядҡа башҡорттарҙы алабыҙ, сөнки улар күптән беҙҙең ҡарамаҡта. Тархандарҙы алһаҡ, улар беҙҙе оҙатып барасаҡ, һаҡ менән тәьмин итәсәк. Типтәрҙәрҙе һәм бобылдәрҙе эшсе көс итеп алырға була. Улар Башҡортостанда күп кенә", - тип яҙа Кириллов. Дәүләт етәкселегенә проект оҡшағанға күрә, ул тиҙ арала тормошҡа ашырыла. Экспедиция 4-5 айҙа әҙерләнеп, 1734 йылдың 10 ноябрендә Өфөгә килеп етә һәм бында ете ай була.

Экспедиция килеүе хаҡындағы хәбәр ишетелеү менән, башҡорттар йыйын йыя. Унда Кирилловҡа барып, экспедицияның маҡсаты, эшмәкәрлеге хаҡында һорарға ҡарар ителә. Ләкин Кириллов ғалим булһа ла, дипломатик сифаттарға эйә булмай. Ҡыҙыу ҡанлы Кириллов экспедицияның маҡсатын аңлатып биреү урынына, башҡорттарҙы асыулы ҡаршы ала, бер нисәүһен бикләп тә ҡуя. Аныҡ ҡына аңлатма ала алмағас, Кириллов уларҙың мөрәжәғәттәрен инҡар иткәс, экспедиция уларҙың ерҙәренә, үҙаллылығына ҡурҡыныс менән янай, тип уйлап, башҡорттар ихтилалға әҙерләнә башлай (Ул ваҡыттағы башҡорт тархандары хаҡында. Таймаҫ Шәимов Ҡара-Табын улысын етәкләй. Ул тулыһынса Рус дәүләте яғында була. Етмәһә, Үрге Йайыҡ ҡәлғәһен үҙ аҫаба биләмәләрендә төҙөргә рөхсәт бирә. Алдар Иҫәкәев урта, нейтраль позицияны һаҡлай. Ул Кирилловтың яғына ла сыҡмай, ихтилалға ла ҡушылмай. Бының үҙ сәбәптәре лә булғандыр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Алдар Иҫәкәевты батша ярандары 1740 йылда Миңзәлә ҡалаһына саҡырып ала һәм язалана).

Кирилловтың башҡорттар менән үҙен шулай насар тотоуы күп насар эҙемтәләргә килтерә лә инде. Документтарҙы ҡараһаң, уның проекты буйынса тик бер ҡалала һәм Каспийҙа ғына пристань эшләү планлаштырылған була. Унда Башҡортостанды тулыһынса ҡәлғәләр менән ҡаплау тигән ниәт теркәлмәгән дә булған (Бәлки, ҡаршы сығыусылар булыр, тип, автор бар ниәтте асып та һалмағандыр). 1735 йылдың авгусында Кириллов тәғәйенләгән еренә барып етә һәм Ырымбур ҡалаһын төҙөй башлай (Бөгөнгө Орск ҡалаһы тәүге Ырымбур була). Шул ваҡытта Кириллов батшабикә Анна Ивановнаға "Беҙ һеҙҙе яңы Рәсәй менән ҡотлайбыҙ", тип хат яҙа. Ырымбур ерҙәре бер кемдеке лә түгел, ул яңы, хужаһыҙ ерҙәр, тип иҫбатларға тырыша. Ә ысынбарлыҡта был урындан Үҫәргән һәм Бөрйән ырыуы башҡорттары ерҙәренең сиге үткән була.

Кирилловтың хаталары күп була. Ул Өфөлә үк экспедицияның кәрәкмәгәнлеге хаҡында аңлай. Юл тотолған Ор йылғаһы бик йыраҡта, урында инфраструктура, йүнле юлдар, ҡәлғәләр юҡ. Аҙыҡ-түлек етешмәй. Икенсенән (тарихсылар был факторға иғтибар итеп бармай), рус-төрөк һуғыштары башланып тора. Төркиә менән мөнәсәбәттәр насарая. Нимә эшләргә? Шуға ла Кириллов Ырымбурға барып етер өсөн ҡәлғәләр төҙөргә ҡуша. Үрге Йайыҡ, Табын ҡәлғәләре барлыҡҡа килә. Һамар, Йайыҡ буйлап 40-лап ҡәлғә төҙөргә ҡарар ителә. Шуларҙың егермеһе төҙөлә. Ул саҡта Башҡорт ерҙәренә бөгөнгө Башҡортостан территорияһы ғына түгел, Һамар, Пермь, Силәбе өлкәләре лә инә. Башҡорттар үҙ ерҙәрен яҡларға тырышып, ихтилалға күтәрелә.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды. (Дауамы бар).**

*ҮӘТ, ЯҢЫЛЫҠ!*

# ӘЛЕГӘ БЫЛ НИӘТ КЕНӘ,

## уның ысынбарлыҡ булыуын көтәйек

**Киләсәктә Өфөлә 1812 йылғы Ватан һуғышында Наполеон армияһына ҡаршы көрәшкән башҡорт яугирҙарына арналған һәйкәл асылыуы ихтимал. Бындай һәйкәл ҡуйыу башланғысы менән "Төньяҡ амурҙары" тарихи клубы ағзалары Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовҡа мөрәжәғәт иткән.**

Идея авторы, "Төньяҡ амурҙары" тарихи клубы ағзаһы, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Илдар Юлбарисов хәбәр итеүенсә, республика етәксеһе проект менән ҡыҙыҡһыныуын белдергән. Проект авторы һүҙҙәренсә, "Өфөлә бындай һәйкәлдең әлегә ҡәҙәр булмауы өсөн оят. Ә бит 1812 йыл яугир башҡорттар өсөн шаҡтай данлыҡлы осор булған. Тарихыбыҙҙы онотмайыҡ, йәштәр шанлы үткәндәрҙе белергә, ғорурланырға тейеш".

Илдар Юлбарисов һөйләүенсә, буласаҡ һәйкәлдең проекты әҙер. Уны ул триумф аркаһы итеп күҙаллай. Ғөмүмән, ҡыйыу яугирҙарҙы сағылдырыу өсөн был алым донъяның күп илдәрендә ҡулланыла. Мәғәнә яғынан да унда күпте күрһәтергә, аңлатырға була. Хатта һуғыштың ниндәйҙер эпизодтарын, яугирҙар һындарын сағылдырырға мөмкин.

Өфөлә ҡуйыласаҡ "Еңеү ҡапҡаһы" ҙур һәм ҡеүәтле булып күҙаллана. Әгәр килеп сыҡһа, хатта уның өҫтөнә менеп, тирә-яҡты күҙәтерлек майҙан да эшләнеүе ихтимал. Монументты баш ҡаланың элекке үҙәгенә, кеше күп йөрөгән күркәм урынына ҡуйыу уңышлы булыр ине.

Ҙур проектты тормошҡа ашырыу өсөн Илдар Юлбарисов исеме донъяға билдәле скульптор Зураб Церетели менән бәйләнешкә ингән.

- Зураб Церетелиға был фекерҙе әйткәс, ул риза булып ҡына ҡалманы, Өфө халҡына тағы бер һәйкәл бүләк итергә теләүен дә әйтте. Ул беҙҙең яҡташыбыҙ Рудольф Нуриевты хөрмәт итә һәм уның һәйкәлен эшләргә хыяллана икән. Бөйөк скульптор оҙаҡламай Өфөгә килеп, етәкселек менән осрашырға йыйына. Шул һөйләшеүҙәрҙән һуң эш башланыр тип уйлайым, - ти Илдар Юлбарисов.

**"БАШИНФОРМ".**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Башҡа кәсептәр тураһында һөйләрҙән алда, башҡорттарҙың йәнлек һәм хайуан тиреһен эшкәртеү үҙенсәлектәренә туҡталырға кәрәк. И.Г. Георгиҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар "йомшаҡ ваҡ-төйәк тирене әсегән һөттә тотоп алғандан һуң, хайуандарҙың баш мейеһен һөртәләр һәм аҡбур менән ышҡыйҙар". Ысынлап та, был башҡорттар араһында киң таралған ысул булған. Һарыҡ бәрәсе һәм быҙауҙарҙың тиреһен киптергәндәр һәм ҡул менән йомшартҡандар. Ҙурыраҡ тиреләрҙе, мәҫәлән, һарыҡтың тиреһенең йомшаҡ яғын тупаҫ бысаҡ менән артыҡ майҙан таҙартып, һуңынан киптергәндәр. Кипкән тирегә йәш ҡорот һөртөп, урап ҡуйғандар. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары тирегә эркет һыуы һөрткән. Ошо рәүешле әсетеп киптерелгән тирене кирге тип аталған махсус ҡоролма менән эшкәрткәндәр.



Кирге - ағас ырғаҡҡа саңғы һынығы, иҫке бысаҡ йәки берәй үтмәҫ тимер киҫәге нығытылып яһалған (һүрәт). Йомшартылған тирене ҡайһы берҙә аҡбур менән ағартҡандар. Тирене ошо рәүешле эшкәртеү башлыса Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә һәм Урал аръяғында күҙәтелгән. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тирене татар йәки урыҫтарға эшкәртергә биргән. Эшкәртелгән тиренән кейем теккәндәр. П.С. Паллас һүҙҙәренә ҡарағанда, XVIII быуаттың аҙағында башҡорттар тун тегеү өсөн тәғәйенләнгән һарыҡ тиреһен "ямғырға, башҡа яуым-төшөмдәргә бирешмәһен өсөн" төтөндә ыҫлаған.



Быҙау, ҡырҡылған һарыҡ, кәзә тиреләренән кейем-һалымдан тыш, йөнө тыш яҡҡа ҡаратып муҡсалар тегелгән. Ул сарма тип йөрөтөлгән (һүрәт). Был муҡсалар ярайһы ғына ҙур булған һәм төрлө әйберҙәр һаҡлау, күсереп йөрөтөү өсөн ҡулланылған. Муҡса уға беркетелгән махсус ҡайыш менән бәйләп ҡуйылған. Икенсе, ҡалынраҡ ҡайыш менән ул эйәргә беркетелгән. Сарма күсмә тормош алып барған башҡорттарҙа, Көньяҡ Уралда һәм уның көнсығыш һыртында осраған.

Ваҡ тиреләрҙе эшкәртеү өсөн еңелерәк ысулдар һайланһа ла, тире эшкәртеү ҡатмарлы эш һаналған. И.Г. Георги хеҙмәттәрендә был турала бер аҙ мәғлүмәт бар, ә И.И. Лепехин иһә тире эшкәртеү тураһында ентекләберәк яҙа. "Сей тирене төрлө яғынан мөмкин булған тиклем тарттырып, ергә бәләкәй ағас ҡаҙыҡтар менән беркетеп, ҡояшта киптерергә һалалар. Кипкән тирене яҙға тиклем һаҡлайҙар. Яҙ махсус ыҫлау урынына һалалар. Тире ыҫлау ҡоролмаһы түбәндәгесә яһала. Баҙ ҡаҙыла һәм баҙҙан ер аҫтынан ике аршин самаһы оҙонлоҡта тишек эшләнә, уның ауыҙы ерҙең өҫтөнә сығып тора. Баҙҙың ауыҙын төбө булмаған ҡабыҡ ҡумта менән ҡаплайҙар, нигеҙен ер менән күмәләр. Тирене элеп ҡуйыр өсөн ҡумта һәм баҙ ауыҙына еп һуҙалар йәки һайғауҙар һалалар. Махсус ҡаҙылған тишекте серегән ағас менән тултырып, уға ут тоҡандарылар һәм ауыҙын томалап ҡуялар. Төтөн канал буйлап баҙға тула һәм тире оҙайлы ваҡыт төтөндә ыҫланып тора. Тиренең ҡалынлығана ҡарап, был эш өс аҙнаға тиклем һуҙыла. Ошо рәүешле эшкәртелгән тиренән аяҡ кейемдәре генә түгел, һауыт-һаба ла тегелә". П.С. Палластың һүҙҙәренә ҡарағанда, бындай тире ыҫлай торған ҡоролмалар Мейәс йылғаһы буйында йәшәгән башҡорттарҙың барыһында ла булған. XX быуаттың башында иһә Урал аръяғында ғына һаҡланып ҡалған.

***✓ Тауыбыҙҙан яҙһаҡ, йылғаларыбыҙ ҙа короясаҡ, һауабыҙ ҙа бысранасаҡ. Ә йылғаһы булмаған ауылдың эсәр һыуы, тимәк, киләсәге юҡ. Шулай итеп, ТОС ойоштороу ауылыбыҙҙы берләштереүсе шәп сара булды.***



# АЙМАҠТАРҘЫ

## йәки Ауылдарҙы

**Бөгөнгө һөйләшеүҙә ҡатнашыусы йәш егеттәр ауылдарҙың бөгөнгө проблемалары, уларҙы хәл итеүҙең заманса саралары һәм онотола башлаған ҡайһы бер тарихи ысулдар тураһында фекер алыша, тәжрибә уртаҡлаша. Улар - Ишембай районы Ғүмәр ауылы һәм уның тәбиғәте өсөн көрәшеүселәрҙең береһе - эколог Азамат ИСХАҠОВ, ауылдарын алдынғылар сафына баҫтырыуҙы маҡсат иткән йәш егет - Иглин районы Үктәй ауылы биләмәһе башлығы Илһам ИМАЕВ һәм ООО СМК "Геострой монтаж" йәмғиәтенең генераль директоры урынбаҫары Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ.**

**▸ Халҡыбыҙ һәр ваҡыт ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу серен белгән: ниндәй генә һуғыштар, киҙеүҙәр, аслыҡтар кисерергә тура килмәһен, ауыл кешеһе һәр заманда ла яңынан терелер көс тапҡан. Ләкин иҫкәрмә рәүешендә килеп тыуған ҡайһы бер ҡаршылыҡтар ғына уның был һәләтен онотторған. Мәҫәлән, башҡорттарҙың ошо һәләте совет власы ваҡытында онотола төшкән. Дәүләт тарафынан ойошторолған эске сәйәсәт тәүҙә ауыл халҡын малмөлкәтһеҙ ҡалдырыуға булышлыҡ итһә, аҙаҡ халыҡты үҙ проблемаларын үҙе хәл итеү мөмкинлегенән дә мәхрүм иткән. Әйтәйек, эре-эре совхоздарҙың барлыҡҡа килеүе быға миҫал булып тора. Шулай итеп, төрлө иҡтисади санкциялар йоғонтоһона элеккән крәҫтиәндең барлыҡ мәшәҡәттәре власть әһелдәре ҡатнашлығында хәл ителгән. Ошондай шарттарҙа ауыл үҙен нисек һаҡлап ҡала ала, тип уйлайһығыҙ? Хәҙер ауылда иң ҙур проблема - эшһеҙлек, тиҙәр, был дөрөҫмө?**

**Илһам ИМАЕВ:** "Ауылда эш юҡ" тигән һүҙ бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бына әлеге ваҡытта беҙҙең ауыл биләмәһендә 550 шәхси ихата иҫәпләнә. Һәр ғаиләнең 25 сутыйҙан да кәм булмаған ере бар. Теләгән кеше эшләй - йәшелсә-емешен үҫтерә, баҙарға алып барып, уны һатып, йүнен күрә. Халыҡ һанына килгәндә, Үктәй ауыл советында 1600 самаһы кеше йәшәй. Улар ниндәй хәстәрлектәр менән йәшәй һуң? Хәҙер беҙҙә ер мәсьәләһе киҫкен тора. Ауылыбыҙ Өфөгә яҡын урынлашҡас, беҙҙең ауыл биләмәһенә килеп төпләнергә теләүселәр, ситтән килеп, урман-һыуҙарыбыҙҙы ҡуртымға алырға яҫҡыныусылар күп. Һуңғылар төркөмөндә бөтөнләй "бит йыумаған", һөмһөҙ әҙәмдәр осрай. Шундай ике кешегә: "Ауыл халҡы ул урындарҙа емеш-еләк йыя, бесән саба алһа ғына..." тигән шарт ҡуйып, ерҙе ҡуртымға биреп, хата ебәреүебеҙҙе һуңынан ғына аңланыҡ. Улары документты ҡулдарына эләктереү менән урындағы халыҡҡа ул ерҙәргә юлды бикләне лә ҡуйҙы.

Бынан ары үҙ эшен асырға теләп, ер һораусы ситтәргә иң тәүҙә бизнес-план төҙөп килтерергә ҡушабыҙ. Ул планда ауылдың нисә егетен һәм нисә ҡыҙын эш менән тәьмин итәсәге, ул ерҙәрҙә халыҡҡа бесән сабыу, еләк-емеш йыйыу мөмкин булырға тейешлеге, ауыл халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртҡан башҡа шарттар айырым-асыҡ яҙылырға тейеш. Ошо тәүге талап үтәлгәндән һуң ғына теге йәки был эшҡыуарға ер биреү-бирмәү мәсьәләһен халыҡ йыйыны хәл итә. Әлбиттә, ауылдаштар ҡайһы бер сетерекле хәл килеп тыуһа: "Һин ауыл хакимиәте башлығы бит, яҡшыраҡ беләһеңдер", - ти ҙә, минең фекерҙе иң дөрөҫө тип ҡабул итә. Ундай мәлдәрҙә һәр кемдең үҙ хоҡуҡтарын белеүҙең мөһимлеген аңлатырға тырышабыҙ.

Бүтән проблемаларыбыҙ ҙа бар. Тәүгеһе - битарафлыҡ. Ауыл тормошо менән ауылдаштарҙың 80 проценты ҡыҙыҡһынмай ҙа тиерлек. Һәр кем үҙ ҡайғыһы, үҙ зары менән көн күрә. Шулай ҙа тормош ихата эсендә генә бармай шул. Мәҫәлән, һәр кем юлда йөрөй, барыһына ла ҡышын яҡшы юл кәрәк, ә бер кем дә юл көрәргә уйламай - ауыл хакимиәте башлығының ойоштороуын көтә. Элек колхоздар бар саҡта ауыл урамдарын 5-6 трактор "һә" тигәнсә таҙартып үтә ине, бөгөн килеп, 5-6 ауылға бер шәхси тракторҙы "тартҡыларға" тура килә. Буррандар башланһа, ҡурҡып торола, сөнки трактор бер үҙе өлгөрә алмай, икенсе көнөнә буран ҡабатланһа, юл өҙөлә. Совет осоронда халыҡ күтәрелеп сыҡмаһын өсөн уның һәр көйһөҙләнеүен ыңғайға һыпырып, мәсьәләләрҙе шунда уҡ хәл итергә тырышҡандар. Халыҡ та проблемаларҙы колхоз хәл итер, тип өйрәнгән. Әлеге оло быуын да колхоз ваҡыттарын һағына...

Бер ыңғайҙан тағын бер мәсьәлә тураһында ла әйтеп китергә кәрәктер - беҙгә берҙәмлек етмәй. Элек, беҙҙең быуын бала саҡта, өмә үткәреү ғәҙәте бар ине. Ә хәҙер барыһы ла аҡса бизмәненә һалына, "Күпме түләйһең?" тиҙәр. Коллективлашыу процесын яңынан башлап булмай бит инде. Шулай ҙа халыҡты берләштереү маҡсатында шәмбе өмәләре ойоштораБыҙ, концерттар, спорт ярыштары, бүтән мәҙәни саралар үткәрәбеҙ. Һуңғы йылдарҙа саңғы ярыштары популярлыҡ яулай бара. Боҙ ҡуҙғалды, тип әйтергә кәрәк. Әммә был юҫыҡта күп эшләргә кәрәк әле. Бында бер ауыл биләмәһе башлығы тырышлығы ғына етмәй - әүҙем кешеләр кәрәк.

**Азамат ИСХАҠОВ:** Элек халҡыбыҙ иркен яландарҙа йәйләп, ҡышлауҙарҙа ҡыш үткәреп, ерен сит баҫҡынсыларҙан яҡлап, ярым хәрби хәлдә йәшәгән ваҡытта ерен, атайсалын күҙ ҡараһылай һаҡлаған. "Минең ерем" тип, ул ата-бабалары төйәк иткән икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе атаған. Бөгөн бына шул "минең ерем" тигән төшөнсә "минең ихатам" кимәленә тиклем тарайҙы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. "Еребеҙ" тип күҙ алдына килтергән ерҙәр ҙә хәҙер федераль ҡарамаҡта һәм был да эсте бошора. Хәҙер килеп, Рәсәйҙең Бөтөн донъя сауҙа ойошмаһына инеүе лә хәлебеҙҙе киҫкенләштерергә тора. Был ойошма ағзаһы булған илдәрҙең инвесторҙарына беҙҙәге ҡаҙылма байлыҡтарға юл асыу - был ойошмаға инеүҙең бер шарты. Ошо тема ойошманы төҙөүҙең ыңғай яҡтары тураһында һөйләй башланыҡ. Шунан һуң аныҡ фекергә килһендәр өсөн ауылдаштарға ваҡыт бирҙек. Шулай итеп, бер йыл үтеп тә китте.

ТОС ойоштороуы еңел түгел - уны теркәргә кәрәк. Оло ҡаршылыҡтар аша үтеп, теркәнек. Артабан иң яуаплы эшкә - тауыбыҙҙы һаҡлауға тотондоҡ. Йәмғеһе 22 инстанцияға - район хакимиәтенән башлап РФ Президенты В.В. Путинға тиклем - хат яҙып, тауыбыҙҙы имен ҡалдырыуҙарын һораныҡ. Ахыр сиктә, тауға ымһыныусылар беҙгә ҡул һелтәне. Ләкин аҙаҡ беленеүенсә, беҙҙең ауыл янындағы тауҙы яулап ала алмағас, уның янындағы тауға тотонғандар. Был хәл менән дә килешә алмайбыҙ - көрәшәбеҙ. Юғиһә, тауыбыҙҙан яҙһаҡ, йылғаларыбыҙ ҙа короясаҡ, һауабыҙ ҙа бысранасаҡ. Ә йылғаһы булмаған ауылдың эсәр һыуы, тимәк, киләсәге юҡ. Шулай итеп, ТОС ойоштороу ауылыбыҙҙы берләштереүсе шәп сара булды.

**Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ:** Ысынлап та, хәҙерге көндә халҡыбыҙҙы берләштереүсе лешәм. Дәүләт кимәлендә рухыбыҙҙы үҫтерергә ярҙам итеүсе бер программа булырға тейеш ул барыбер. Ә быны кем эшләр - билдәһеҙ. Ни өсөн проблемалар алҡымға килеп тығылһа ғына йүгергеләй, уйлана, кәңәшләшә башлайбыҙ беҙ? Был ваҡытта күп эштәрҙең "ҡыҙыу сағында һуғыр" ваҡыты үткән була бит...

**Илһам ИМАЕВ:** Рәсәйҙең парадоксы шунда инде. Беҙ бер сиктән икенсе сиккә һуғылып, һикереп тик йөрөйбөҙ. Психологиябыҙ шулай.

**Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ:** Ауылда эш бар ул, эштән күп нәмә юҡ, тик шул эште ойоштороусыһы ғына юҡ. Кеше рәхәткә тиҙ өйрәнә. Ауыл халҡы һуңғы егерме йыл эсендә эшләмәү рәхәтлегенә лә тиҙ өйрәнде. Бөгөнгө кешене ана шул рәхәтлек, комфорт бөлдөрә лә инде ул. Халыҡ, проблема һәр кемдең "йортона" ҡағылмайынса, берләшергә ашыҡмай ниңәлер... Ғүмәр ауылы кешеләре миҫалын ҡараһаҡ та шул уҡ хәл. Тәүҙә бер-ике инициативалы кеше баш ҡалҡытып ҡараған, тик уларҙың һүҙенә берәү ҙә ҡолаҡ һалмаған.

тирәһендә бөгөн болоттар ҡуйырғандан-ҡуйыра бара...

Мәҫәлән, ауылыбыҙ янындағы тау өсөн нисек көрәшеүебеҙ тураһында һөйләп үтәйем. Ишембай районы хакимиәте Ғүмәр ауылы янындағы тауҙы юл төҙөүҙә файҙаланыу тураһында ҡарар сығарғандан һуң, ауылдаштар был хәлгә үҙҙәренең ҡаршы булыуын белдереп, бер-нисә урынға хат яҙа. Тырышлыҡтарынан фәтеүә булмағас, бер ағай, юридик документтар тултырыуҙа ярҙам һорап, миңә мөрәжәғәт итте. Ошо ауыл кешеһе булараҡ, был изге эшкә мин дә ҡушылып киттем. Мөрәжәғәттәребеҙҙең һөҙөмтәһе булһын өсөн Территориаль йәмәғәт үҙидаралығына (Территориальное общественное самоуправление -ТОС) берләшергә ҡарар иттек. Йәғни, ауыл менән ТОС ойошторған хәлдә, беҙгә, юридик рәүештә теркәлгән ойошма булараҡ, ҡайһы бер мәсьәләләргә ауыл исеменән ҡарашыбыҙҙы белдереү, нисектер йоғонто яһау мөмкинлеге тыуыр, тинек. Тәү сиратта, ТОС ойоштороуҙың барлыҡ әтнәкәләре менән ауылдаштарҙы таныштырып сығырға кәрәк булды. Аҙна һайын йыйылыштар үткәреп, ошо

ошондай идеалдар юҡ кимәлендә шул. Көнбайыштың төрлө мәғлүмәт саралары тәҡдим иткән ялған идеалдарҙы беҙҙең халыҡ күңеле менән ҡабул итә алмай барыбер. Совет осоронда йәштәрҙе комсомол тупларға, ойошторорға тырышҡан, ниндәйҙер бурыстар ҡуйып, алға әйҙәгән. Әммә хәҙер йәштәр үҙ алдына маҡсат ҡуя белмәй. Минеңсә, иң башта ошондай ТОС кеүек берәмектәргә ойошорға, проблемаларҙы барларға һәм маҡсаттар билдәләргә кәрәктер беҙгә. Юғиһә, зарланыуҙан башыбыҙ сыҡмай.

**▸ Тимәк, "ауылда эш юҡ" тигән һүҙ бөтөнләй ысынбарлыҡҡа тура килмәй булып сығамы?**

**Азамат ИСХАҠОВ:** Әле күптән түгел генә ауылда йыйылыш үткәреп, эшһеҙлек бармы, тип һораныҡ. Ауылда эш юҡлыҡҡа зарланмай халыҡ. Үҙ йүнен күрергә тырышып, бар хәленсә эшләй һәм күпмеләр аҡсаһын да таба. Илнур, һинең фекерең менән ки-

**Азамат ИСХАҠОВ:** Эйе. Шуға ла беҙ бынан ары ҡуртымға алып булһа ла үҙ ерҙәребеҙҙе һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ. Документтарҙы әҙерләй башланыҡ та инде. Ерҙәрҙе ни өсөн ҡуртымға алырға тейешбеҙме? Беҙҙең ауылыбыҙ тәбиғәт ҡосағында - тауҙар, урмандар төпкөлөндә урынлашҡан. Шуға ла был ерҙәргә хужа булырға теләүселәр бик күп. Мәҫәлән, Ҡолғона, Маҡар ауылдарына Мәскәү кешеләре килеп, "Күкҡарауыҡ" тигән база асты ла, бының менән ауыл халҡына бик күп уңайһыҙлыҡтар тыуҙырҙы. Ауыл халҡы ҡаршы сығып ҡараны - файҙа булманы, сөнки ерҙәр - федераль ҡарамаҡта. Ул ерҙәрҙә элек урындағы халыҡтың бесән сабыуы ла кәртә була алманы. Ағас менән дә шул уҡ хәл. Беҙҙең кешеләргә ул ағас эләкмәй ҙә - Магнитогорск, Силәбе яҡтарынан килеп, урмандарҙы юҡ итәләр. Был проблеманы ла хәл итергә кәрәк.

**Илһам ИМАЕВ:** Ауылдарын сит кешеләрҙән һаҡлауҙары тураһында Азамат бик файҙалы итеп һөйләне, уларҙың аҡылын "мыйыҡҡа урап" ултырҙыҡ. ТОС тураһында күп ишеткәнем, уҡығаным, шуға арналған форумдарҙа ҡатнашҡаным бар. Әйткәндәй, Азамат, һинең менән дә шуларҙың береһендә танышҡайныҡ... Ерҙәребеҙҙе һаҡлар өсөн беҙгә лә ТОС ойошторорға кәрәктер, тигән һығым-

> ***Бүтән проблемаларыбыҙ ҙа бар. Тәүгеһе - битарафлыҡ. Ауыл тормошо менән ауылдаштарҙың 80 проценты ҡыҙыҡһынмай ҙа тиерлек. Һәр кем үҙ ҡайғыһы, үҙ зары менән көн күрә. Шулай ҙа тормош ихата эсендә генә бармай шул. Мәҫәлән, һәр кем юлда йөрөй, барыһына ла ҡышын яҡшы юл кәрәк, ә бер кем дә юл көрәргә уйламай - ауыл хакимиәте башлығының ойоштороуын көтә. Элек колхоздар бар саҡта ауыл урамдарын 5-6 трактор "һә" тигәнсә таҙартып үтә ине, бөгөн килеп, 5-6 ауылға бер шәхси тракторҙы "тартҡыларға" тура килә.***

✓ ***Ҡатнаш никахтар милләтебеҙҙе әкренләп тарҡата, бөтөрә бара һымаҡ тойола миңә. Шулай ҙа, Сабит кейәү, улыңды, йәғни минең ейәнемде ауылға алып ҡайтып, бик тә дөрөҫ эшләгәнһең...***




Әинде Сабит улының фотоһүрәтен күрһәткәс, Рәхимйән ағай бигерәк йәнләнеп китте.

- Быныһы - минең копиям да баһа! Настоящий башҡорт малайы. Тик әсәһе урыҫса ғына һөйләшәләр инде уның менән?..

- Минең әсәйемдәрҙә, йәғни ауылда ул, - тине Сабит. - Таптаҙа башҡортса ғына һөйләшеп йөрөй малай...

Рәхимйән ағай тынысланғандай булды. Ҡатыны Һөйәрбикә аш бүлмәһенә йәнә инеп киткән саҡты файҙаланыпмы, бер аҙ күңел нескәлектәренә бирелеп алды.

- Матурлығына ҡыҙығып, заманында мәрйәгә барып юлығылғайны шул, кем, Сабит кейәү. - Рәхимйән ағай тамағын ҡырып алды ла, артабан дауам итте. - Уның менән нисек йәшәүемде бәйән итеп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр, тип уйлайым. Әммә үҙемдең киләсәк быуындарыма васыят итеп ҡалдырырлыҡ һүҙем бар. Әле бына һин дә минең йәш саҡтағы хатамды ҡабатлағанһың һымаҡ тойола...

- Бәй, Рәхимйән ағай... ғәфү итегеҙ, ҡайным, - Сабит бер аҙ тулҡынланды, - һәр милләттең яҡшылары, ямандары ла була... Һеҙҙең ҡыҙығыҙ - үҙебеҙҙең милләттән дә инде. Исеме лә - Гөлгөнә...

- Бик тә дөрөҫ әйтәһең, кейәү, төрлө кешеләр була. Мин башҡа милләт кешеләрен һис тә яманларға йыйынмайым. Әммә ниндәй генә яҡшы кеше булыуҙарына ҡарамаҫтан, бергә тормош ҡорған ике милләт кешеһе араһында һәр төрлө аңлашылмаусанлыҡтар йыш килеп сығыусан була. Әлбиттә, ҡыҙым хаҡында бер ни тип тә әйтә алмайым, кейәү. Әсәһенең тәрбиәһендә нисек үҫкәндер инде ул бала? Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең башҡорт рухында түгелдер инде. Ҡатнаш никахтар милләтебеҙҙе әкренләп тарҡата, бөтөрә бара һымаҡ тойола миңә. Хәйер, башҡа милләт кешеләрен дә тап ана шул һорау борсойҙор. Шулай ҙа, Сабит кейәү, улыңды, йәғни минең ейәнемде ауылға алып ҡайтып, бик тә дөрөҫ эшләгәнһең...

- Алып барырға мәжбүр булдым инде. Хәҙер инде өйрәнеп тә алдыҡ. Атайым менән әсәйемде Сәлим үҙ ата-әсәһе , ә мине һәм Гөлгөнәне ағаһы менән еңгәһе итеп күргән һымаҡ та тойола ҡайсаҡ...

- Шулай була шул. Кем тәрбиәләй, бала ана шуға яҡыныраҡ була инде. Ә беләһеңме, Оля менән, йәғни һинең ҡәйнәң менән минең арала ни өсөн иң тәүге ығы-зығы килеп сыҡҡанын? - тип тағы ниҙер әйтмәк булды ҡайныһы. - Гөлгөнә тыуыр алдынан уға исем эҙләй башлағас та ныҡ ҡына итеп талашып алғайныҡ. Ул саҡта УЗИ тигән нәмәне әллә ни ҡулланмайҙар ине. Тыуасаҡ баланың малаймы, ҡыҙмы икәнен дә белмәй тороп, ниндәй исем ҡушыу мәсьәләһе буйынса бәхәсләшеп киттек. Оля, ни өсөндөр, малай тыуасаҡ, тип ышанып йөрөнө. Бер күрәҙәсе уға шулай тип әйткән ине, буғай. Ул, әлбиттә, тик урыҫ исеме ҡушыу яғында. Ҡыҙ исемен хатта эҙләп тә маташмай. Мин "Малай булһа, үҙең теләгән исемде ҡушырһың, ә ҡыҙ тыуа ҡалһа, мин башҡортса Гөлгөнә тип ҡушам", тигәс, шундуҡ риза булды. Ә инде ҡыҙыбыҙ тыуғас, баланың иң олоһо башланды ла инде. Мин дә ҡаты торҙом. Барыбер ҡыҙға тап шул исемде ҡушыуға ирештем. Йәш бала тәрбиәләп йөрөгән ҡатындың артабан бәхәсләшергә, бәлки, көсө лә етмәгәндер... Әммә ул Гөлгөнә тигән исемде бер ваҡытта ла әйтмәне, ә фәҡәт "Гуля" тип кенә атаны ҡыҙҙы. Баланан арынып, бер аҙ шәбәйеп алғас, Оляның ысын асылы беленә башланы ла инде. Һис юҡҡа дау ҡуптарып, гел генә әрләшә торған булып китте. Уның ошо ғәҙәте тора-бара бөтә һылыулығын юйып ташлағандай булды. Иң йәнемә тейгәне мине "башкиренок" тип эләкләүе ине. Сығышы буйынса үҙен кәмендә бер башҡа юғарыраҡ тойҙо. Русса һөйләшкән саҡтағы акценттарым, бер аҙ яңылышыуҙарым өсөн мине мыҫҡылларға әҙер ине. Йәш саҡта ярайһы ғына ғорур тәбиғәтле, һәүетемсә тәүәккәл генә лә инем шул үҙем дә. Шундай бөйөк тип һанап, ғорурланып йөрөгән үҙемдең яратҡан милләтем өсөн ғүмерем буйы кемдәндер кәмһетелеп йәшәргә риза булманым. Көндәрҙән бер көндө донъяһына төкөрөп сыҡтым да киттем. Үҙ милләтеңә берәү ҙә етмәй, тигән һығымтаға килдем. Күпмелер ваҡыттан бына ошо Һөйәрбикә апайығыҙ менән таныштым. Өйләнештек. Хәҙер инде егерме йылға яҡын һин дә мин гөрләтеп тормош көтөп ятабыҙ. Ике улыбыҙ бар. Урал менән Салауат. Олоһо инде БДУның филология бүлегендә белем ала, ә кеседһе башҡорт гимназияһында уҡый...

Һөйәрбикә апай ҙа бик алсаҡ булып сыҡты. Ҡайныһы менән Сабит ул-былды һөйләшеп бөтөүгә, бишбармаҡ та өлгөрҙө.

- Минең яратҡан ашым, - тине Рәхимйән ағай ҡатыны тәрилкәләргә һалып биргәс. - Бишбармаҡҡа ни етә! Әйҙә, кейәү, башҡортсалап, ҡутара итеп ашап ултыр. - Сабитҡа ҙур ғына итле һөйәк тотторҙо...

Күңеленә хуш килеп, яратып өлгөргән ҡайныһы менән йылы ғына хушлашты Сабит. Бынан ары осрашып торорға һүҙ ҡуйыштылар. Киләһе килгәндә, бәлки, Гөлгөнәһен дә килергә күндерер әле. Өҫтәүенә, атаһының да уны бик-бик күргеһе килә...

* * *

Көндәрҙән бер көндө Сабит Хәкимовичҡа прокуратуранан танышы шылтыратты. Оҙаҡламай хаҡлы ялға сығырға йыйынған прокурор ярҙамсыһына ярты йыл элек кенә Сабит операция яһағайны.

- Сабит Хәкимович, ваҡытығыҙ булһа, минең янға инеп сығығыҙ әле, - тине Зәбир Мәхмүтович арыған тауыш менән. - Бер аҙ һөйләшәһе һүҙ бар. Үҙем үк һеҙгә килеп сығыр инем дә, ошо арала эштәр күбәйеп китте. Пенсия алдынан бар эштәремде ослап ҡуяйым, тип тырышып ятҡан көн...

- Телефон аша ғына әйтергә булмаймы ни? - тине Сабит. - Әллә йөрәгегеҙ тағы ла тынысһыҙландыра башланымы?

- Юҡ, доктор, йөрәк, Аллаға шөкөр, ауыртмай. Хатта хәҙер уның ҡайһы урында торғанын да оноттом, - Зәбир Мәхмүтович үҙенең еңелсә ҡарлыҡҡан тауышы менән йүткерә-йүткерә көлөп алды.

- Тәмәкене тәки ташлай алмағанһығыҙ шикелле, Зәбир ағай, - тине Сабит.

- Что верно - то верно, - тине Зәбир Мәхмүтович ни өсөндөр урыҫсалап. - Беҙҙең эштә тәмәке тартыуҙы ташлауҙары, айһай... Әммә, һүҙ минең һаулыҡ тураһында түгел, доктор. Ғөмүмән, телефон аша һөйләшә торған хәбәр түгел. Инеп сыҡ.

- Ярар, бөгөн үк төштән һуң килеп етермен, - тине лә күңеле ниндәйҙер насар нәмә һиҙенгән Сабит телефонын һүндерҙе. Прокурор менән буласаҡ һөйләшеү бигүк яҡшы нәмә вәғәҙә итмәгәнен тойҙо ул. Хәйер, хирургтарҙың эш буйынса прокуратура менән йыш ҡына бәйләнешеүҙәре бер ҙә яңылыҡ түгел дә...

Сабит бүлмәгә ингәндә сәстәре яртылаш салланған, маңлайҙарын, сикәләрен "бураҙналар" биҙәй башлаған Зәбир Мәхмүтович, сираттағы "торбаһын" көйрәтә-көйрәтә, ҡулына тотҡан ҡағыҙҙағы яҙыуҙы инде әллә нисәнсе ҡат уҡый ине. Инеүсене күреп, алтмыш йәшлек был кеше егеттәрсә еңел генә урынынан торҙо ла, үҙенең хөрмәт иткән докторы менән ике ҡуллап күреште.

- Әйҙә, доктор, үтеп ултыр, - тине ул йылмайып. Өҫтәле янындағы ултырғысҡа күрһәтте. Унан баянан бирле ҡулында тотоп ултырған ҡағыҙҙы Сабит Хәкимовичҡа һондо.

- Был нимә? - тине Сабит, ҡағыҙға ҡарамайынса.

- Анонимка, - тине Зәбир Мәхмүтович етди төҫ алып. - Анонимка булғаны өсөн дә рәсми саҡыртманым инде мин. Бындай нәмәләрҙе беҙ хатта тикшереп торорға ла тейеш түгелбеҙ. Кеше балаһы шулай, күрәһең, - прокурор бер аҙ фәлсәфәгә төшөп китте. - Башына бәлә килгән саҡта бар донъяһын бирергә әҙер. Әммә ана шул бәлә-ҡаза үҙен ситләтеп үтеп китеүе була, был хаҡта бик тиҙ онотоусан. Ана шундай пациенттарыңдың береһе яҙған, буғай...

Аҫтында бер ниндәй ҙә ҡултамға булмаған был ҡағыҙҙа кардиохирург Хәтмуллин Сабит Хәкимовичтың йөрәккә яһаған операция өсөн унан йөҙ мең һум аҡса алыуы хаҡында яҙылғайны. "Минең генә түгел, палатала бергә ятҡан башҡа намыҫлы граждандарҙың да һуңғы аҡсаларын һалдырып алыуҙан тартынмаған был оятһыҙ әҙәмгә кеше ғүмерен ышанып тапшырыу дөрөҫ түгел..." - тиелгәйне.

- Бындай хаттар буйынса, әлбиттә, прокуратураның бер ниндәй ҙә "эш" ҡуҙғатырға хаҡы юҡ. Һеҙҙең намыҫлы хирург икәнегеҙгә лә шикләнмәйем. Шулай ҙа, Сабит Хәкимович, мин һеҙгә, яҡын күргән кешемә, быны күрһәтмәй булдыра алманым... - Зәбир Мәхмутович тағы бер сигарет алып ҡабыҙҙы ла, төтөнөн ауыҙы һәм танауынан бер юлы сығара-сығара дауам итте. - Бына ни әйтмәксемен, доктор. Утһыҙ төтөн сыҡмай, тигәндәй...

- Аңламаным... - тип бүлдерҙе Сабит түҙемлеген юғалтып, урынынан ҡалҡып торҙо. - Һеҙ әллә мине...

- Юҡ, юҡ, доктор, мин һеҙҙе бер ниҙә лә ғәйепләргә йыйынмайым. Бергә эшләгән коллегаларың һинең исемдән берәй мутлыҡ ҡылып йөрөмәгәйҙәре... Ярар, ошоноң менән беҙҙең был һөйләшеүҙе тамам, тип һанайыҡ. Анонимка - анонимка ғына булып ҡалһын...

Был хәлдән һуң ярты йыл самаһы уны бер кем дә бимазаламаны. Ул үҙ эше менән булды. Ә күрше бүлектә Гөлгөнәһе төнгө дежурҙарҙа шәфҡәт туташы вазифаһын башҡарыуын дауам итте. Бер генә нәмә һаман күңелен ҡырҙы Сабиттың: хәләл ефете йыш ҡына береһенән-береһе затлы әйберҙәр һатып ала, улар ябай медсестраның айлыҡ эш хаҡына ҡарағанда күпкә ҡыйбатыраҡ, етмәһә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә инде өсөнсө машинаһын алыштырҙы. Ялтлап торған ҡыҙыл төҫтәге "Шкода" машинаһында ғына елдерә хәҙер уның хәләл ефете. Шунса ҙур аҡсаны ҡайҙан алып йөрөүе хаҡында һорашырға теле барманы, әллә ҡыйыулығы етмәне Сабиттың. Был хаҡта һүҙ башларға бер-нисә мәртәбә уҡталып та ҡуйҙы ҡуйыуын, әммә ир кешенең психологияһын яҡшы белгән ҡатыны уны шунда уҡ нисектер тиҙ генә ҡарауатҡа "йығып һала" ла, бар донъяһын оноттора...

Бер кис "Закондан тыш" тип аталған сираттағы телетапшырыуҙа көньяҡ илдәрҙең береһендә тракторҙар менән һөрөп, күҙҙең яуын алып торған мәк сәскәле икһеҙ-сикһеҙ баҫыуҙарҙы аяуһыҙ юҡ итеүҙәрен күрһәтәләр ине. Ҙур экранлы төҫлө телевизорҙа уғата ла матур булып күренә шул сәскәләр...

- Ҡара әле, Гөлгөнә, бигерәк тә йәл шул сәскәләр, - тине Сабит, ир затынан булыуына ҡарамаҫтан, нишләптер күңел нескәлегенә бирелеп. - Матурҙар бит...

- Эйе шул, - тине ҡатыны. - Уларҙан опиум алалар бит...

- Шулайын шулай... Әммә бындай гүзәл үҫемлектән кешелектең үлемесле дошманы - ҡәһәрле наркотик килеп сыға икәненә хатта ышанғы ла килмәй...

* * *

Был юлы прокуратураға уны повестка менән саҡыртып алдылар. Бер түгел, хатта өс пациенты бергәләшеп яҙған ялыу буйынса. Анонимка түгел, ә рәсми яҙылған ҡағыҙ.

- Һеҙҙең ҡушыуығыҙ буйынса, ҡатынығыҙ Гөлгөнә Рәхимйән ҡыҙы әйтеп үтелгән өс пациентығыҙҙан һикһәнешәр мең аҡса алған. Был аҡса, беҙҙең телдә, ришүәт, тип атала, - тине прокурор урынбаҫары. Хаҡлы ялға киткән Зәбир Мәхмүтовичтың урынында күптән түгел генә эшләй ине етди йөҙлө был йәш кеше.

- Ҡатыным?.. Минең ҡушыуым буйынса?.. - үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмағандай ҡабатлап һораны Сабит Хәкимович. Кинәт кенә шыбыр тиргә батты. Ҡатмарлы операцияларҙа ла шулай тирләмәйҙер ул. Асыуҙан ҡалтырана башлаған ҡулдары менән өҫтәл ситенә таянып, урынынан ҡалҡына башланы.

- Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ!.. - тауышын күтәрә төштө. - Яла яғыу бит был!

- Ултырығыҙ, тынысланығыҙ, - тине закон кешеһе ярайһы ғына ҡырҡа итеп. - Ҡайҙа икәнегеҙҙе онотмағыҙ. Был эмоцияларға ирек бирә торған урын түгел. - Күк төҫтәге формаһының яурындарына кескәй өс йондоҙло погон таҡҡан ситтәрәк ултырған йәш кешегә күрһәтте. - Тикшерерҙәр, асыҡларҙар. Әгәр ғәйебегеҙ булыуы иҫбатланмаһа, башҡаса борсоп та тормаҫтар. Яҡлашырға адвокат бирербеҙ.

- Адвокатҡа мохтаж түгелмен.

- Улайһа, рәхим итеп, Георгий Иванович, эшегеҙгә тотоноғоҙ, - ул йәш тәфтишсегә бойорҙо...

Өйгә һуңлап ҡына ҡайтып инде. Көн дә эштән ҡайтыу менән иң тәүҙә Гөлгөнәһен сикәһенән үбеп ала торған Сабит был юлы беренсе мәртәбә үҙ ғәҙәтен үтәмәне.

**(Дауамы бар).**

ИЖАДХАНА

**Һуңғы ике йыл эсендә башҡорт кино сәнғәтендә бик үҙенсәлекле милли фильмдар барлыҡҡа килде, тимәк, бөгөн башҡорт киноһы үҙенең үҫеш осорон кисерә, тип хаҡлы рәүештә әйтә алабыҙ. Бөгөнгө геройыбыҙ - кинорежиссер Айнур АСҠАРОВтың исеме лә кино һөйөүселәргә яҡшы таныш. Тап Айнур һымаҡ йәш, әммә үҙ эшен яҡшы белгән режиссерҙарҙың тырышлығы арҡаһында башҡорт киноһы донъя киңлегендә лә танылыу таба. Тап улар башҡа милләттәргә башҡорт киноһы феномены тураһында һөйләргә мәжбүр итә. Шуға ла быйыл Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына тәҡдим ителеүселәр араһында Айнурҙың булыуын барыһы ла тейешле һәм кәрәкле ваҡиға итеп ҡабул иткәндәр. Был премияға төрлө кимәлдәге фестивалдәр лауреаты исеменә лайыҡ булып, ярайһы ғына ҙур уңыштар менән килгән режиссер ҡайһы бер фекерҙәре менән уртаҡлаша.**



# БАБИЧ РУХЫ...

## илен һөйгән һәр кешелә йәшәй

### Еңмеш - ул мин

"Еңмеш" фильмын ҡараған һәр кеше: "Еңмеш - ул һинме?" - тип, мотлаҡ һорай. Ғөмүмән, был миңә иң йыш бирелгән һорауҙыр. "Еңмеш" - ул минең бала сағым тураһындағы кино. Ундағы һәр ваҡиға минең бала сағымдан алынған. Уны тамашасы шул тиклем яҡшы ҡабул итте һәм миңә артабанғы ижадымда "Еңмеш" яулаған кимәлде һаҡларға тура килә, хәҙер был фильмдан насарыраҡ фильм төшөрөргә хаҡым юҡ, тип иҫәпләйем. Эшемә талапсан ҡарайым, бергә эшләгән кешеләргә лә талапсанмын һәм ижадта нисек тә барыһынын да мин теләгәнсә, мин уйлағанса булыуына мотлаҡ өлгәшәм. Шуға ла үҙемә лә йышыраҡ "еңмеш", тип өндәшәләр. Талапсанлыҡ режиссер өсөн иң төп һәм кәрәкле сифаттарҙың береһелер, тим.

"Еңмеш" уйын фильмы жанрындағы беренсе эшем һәм ул иң ҡыҙыҡлы, иң уңышлы проект булды һымаҡ. Уны "Ливандия Энтертейнмент" компанияһы ике йыл ярым тирәһе төрлө фестивалдәрҙә йөрөтә. Һәр хәлдә, "Еңмеш" фильмы менән мин ярты донъяны урап сыҡтым. Биш континентта ла, хатта Антарктидала булырға тура килде. Бөгөнгө көнгә фильмдың 40-тан ашыу бүләге бар.

"Еңмеш"тең бындай популяр булыуының төп сәбәбе - уның эскерһеҙ, ихлас булыуындалыр. Фильмды төшөрөүҙә ҡатнашҡан һәр кемдең үҙенең эшенә яратып, ысын күңелдән тотоноуы уны ошо кимәлгә күтәрҙе лә инде. Ихласлыҡ сәнғәттең бар жанрҙарында ла - театрҙа ла, кинола ла, һынлы сәнғәттә лә булырға тейеш. Әгәр ҙә автор ихласлыҡ менән ижад итә икән, тамашасы быны шунда уҡ тоя һәм был үҙен аҡлай. Унан һуң, ҡыҫҡа метражлы кино шиғыр һымаҡ булырға тейеш. Шуға ла бында тамашасыға сәйнәп ҡаптырыу юҡ, ә тамашасыға уйланырға урын ҡалдырыла. Фильм ошоноһо менән дә отошло булды, ахыры.

Әйткәндәй, "Еңмеш" менән фестивалдәргә күп йөрөгәс, уны ситтә һәм үҙебеҙҙә нисек ҡабул итеүҙәрен сағыштырып ҡарайым да, үҙебеҙҙә битарафлыҡ тоям. Был халҡыбыҙҙың үҙ хисен артыҡ белгертеп бармауы менән дә бәйлелер, бәлки. Эйе, интернетта "Рәхмәт, шәп фильм, бала сағым иҫкә төштө", тип яҙалар ул. Шулай ҙа ситтәр икенсерәк ҡабул итә, улар икенсе, яңы донъя асҡаным өсөн рәхмәтләрәк, тип әйтәйемме. Әйттем инде, "Еңмеш"те төрлө фестивалдәргә саҡыралар, ул Санкт-Петербург хөкүмәтенең йәштәр премияһына лайыҡ булды. Күптән түгел үҙем белем алған Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университетының XIII "ПитерКиТ" студент фильмдары фестивале "Еңмеш" фильмы менән асылды. Шулай уҡ был фестивалдә "Бал әсеһе" тигән фильмым ҡатнаша, уның буйынса ла ыңғай комментарийҙар бар.

"Еңмеш" фильмын эшләүе миңә ҡыҙыҡлыраҡ булды, сөнки ундағы тормош таныш һәм яҡын. "Бал әсеһе" иһә жанры буйынса бөтөнләй икенсе фильм. Ул диплом эше булғанлыҡтан, яуаплылыҡ та ҙур ине. Уны төшөргән саҡта ныҡ икеләндем. Дөрөҫөн әйткәндә, был фильмдың килеп сығыуына үҙемдән башҡа берәү ҙә ышанманы ла шикелле. Хатта бергә эшләгән команданың да, беҙ ниндәй фильм төшөрәбеҙ ул, тип һораған саҡтары булды. Етмәһә, был фильмды төшөргәндә административ мәсьәләләр, ярҙам итегеҙ инде, тип һораныуҙар, үтенеүҙәр үҙәккә үтте. Аллаға шөкөр, фильм төшөрөлдө, уны тамашасы иғтибарына сығарҙыҡ. 3-4 октябрҙә XXIV "Рәсәй" Асыҡ документаль кино фестивалендә ҡатнаштыҡ. Был бик дәрәжәле фестиваль, унда һөләтле һәм тәжрибәле документалистар йыйыла. Тамашасы фильмды бик ыңғай ҡабул итте, фильмды ике тапҡыр күрһәттеләр, икенсе көнөнә уны махсус рәүештә килеп ҡараусылар булды.

### Балалар иң яҡшы актерҙар

Быйыл йәй буйы "Саҡ менән Суҡ" легендаһы буйынса яңы фильм төшөрөргә әҙерләндек. Был тарих миңә бала саҡтан яҡын, уны фильм итеп төшөрөргә хыялым бар ине. Шаура Шакурова менән сценарий яҙҙыҡ. Был тарих миңә бик оҡшай. Ни өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙы яҡшыраҡ аңлаһындар өсөн ир-егеттәр өсөн фильм төшөрмәҫкә әле, тип уйланып йөрөнөм берауыҡ. Ябай ғына тарихты мифтар, икенсе йән эйәләренә әйләнеү кеүек элементтар менән биҙәргә тырыштыҡ. Мәҫәлән, балаларҙың ҡулдары урынына ҡанаттар үҫеп сыға һәм бында ябай, осһоҙло графика урынына икенсерәк ысулдар ҡулланғы килгәйне, әммә былар бик ҡиммәткә төшәсәк ине. Техник яҡтан ҡатмарлы булыуы, ҡыҙыҡлы оператор эше фильмдың сығымдарын да арттыра. Бағыусылар таба алмаңыҡ әлегә, шулай ҙа фильмдың ҡайһы бер өлөштәрен төшөрҙөк. Киләһе йыл тағы эштәрҙе дауам итергә уйлайбыҙ. Бәлки, был фильм өсөн Президент грантына дәғүә итербеҙ, йәиһә башҡа юлы килеп сығыр, беҙ быға ышанабыҙ әле.

Игеҙәктәрҙе Алсын менән Сыңғыҙ Солтанморатовтар уйнай. Балалар менән эшләүе оҡшай миңә, бер-беребеҙҙе тиҙ күреп аралашабыҙ, бергәләп илайбыҙ, ҡыуанабыҙ. Бик эмоциональ бер сәхнә төшөрҙөк, унда уларҙың береһе яңылыш ҡына буре өсөн ҡорolған соҡорға төшөп китә, икенсеһе уны тартып сығарырға тейеш. Был күренештәрҙең барыһы ла ҡысҡырыу, илау менән оҙатылырға тейеш. Актерҙарҙан айырмалы рәүештә, балалар менән уны өсөнсө тапҡырҙан уҡ төшөрә алдыҡ. Балалар бит ихлас, фильм төшөргәндә лә ихласлыҡ буйынса ололар уларға еткерә алмай.

### Башҡорт киноһы үҫешәсәк әле

Тыуған яғым - Хәйбулла районы Маҡан ауылында төрлө милләттәр араһында үҫтем. Санкт-Петербургта белем алдым, әле шунда йәшәйем һәм ҡайҙа йөрөһәм дә, минең башҡорт милләтенән икәнемде барыһы ла белә. Университетта башҡорттарҙы былай ҙа беләләр, сөнки унда уҡыусылар күп. Шөкөр, миңә барыһы ла енел бирелә, университеттағы уҡытыусылар менән дә уртаҡ телде тиҙ табам. Уларҙың миңә яҡшы мөнәсәбәтен дә аңлата алам. Петербург, Мәскәү кешеләре барыһы менән дә шунда уҡ тиң күреп һөйләшергә тырыша, хатта 70 йәшлек олпат профессорға ла "һин", тип өндәшеү ғәҙәти хәл.

Бар фильмдарым да башҡортса төшөрөлә, бар ерҙә лә уларҙы башҡортса күрһәтәм - был минең өсөн принципиаль мәсьәлә. Тамырҙарың ҡайҙан икәне күренергә тейеш. Күптәр, башҡортса төшөрәһен, тимәк, республиканда бағыусыларың күптер инде, тиҙәр. Бағыусылар миңә ниндәй телдә фильм төшөрөргә кәрәклеге тураһында талап ҡуя алмай, сөнки был минең инаныуым. Башҡорт милли киноһы булһын һәм уны ситтә таныһындар өсөн шулай эшләйем, һәм был миңә ҙур ләззәт килтерә.

Милли кино тураһында һөйләгәндә, беҙ үҙебеҙҙе айырым дәүләттәр менән сағыштырып ҡарайбыҙ - бар бәләбеҙ ошонда. Беҙ айырым дәүләт түгел һәм беҙҙә милли фильмдарҙы төшөрөү һәр ваҡыт ауырыраҡ буласаҡ. Рәсәйҙең иң ҙур ете кино етештереүсе компанияһынан һуң милли кино үҫешенә бер нәмә лә ҡалмай. Республикала 100 миллионлыҡ грант булдырыу - быны, исмаһам, яҡшы күренеш. Тик бер ҡыҙыҡ нәмә бар: беҙҙә был грантты барлыҡ дәғүәселәр араһында, бер жанрҙы ла ситтә ҡалдырмаҫҡа тырышып тигеҙ бүләләр. Әгәр ҙә ун яҡшы кино проекты бар икән, ни өсөн грантты уларҙың барыһына ла бирмәҫкә? Быйыл киноға - бер грант, театрға - бер грант, тип түгел, ә лайыҡлы һәм әһәмиәтле проекттар өсөн бирелһә, үҫеш буласаҡ.

Беҙгә кино төшөрөргә мөмкинлектәр, иғтибар юҡ, тип әйтергә ярамһаҡ та, һуңғы ике йылда был өлкәлә ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә. Роман Пожидаев, Таңсулпан Бураҡаева, Вилүрә Иҫәндәүләтова яңы фильмдар төшөрә, фестивалдәрҙә ҡатнаша, Булат Йосоповтың киномәктәбе эшләй. Профессионалдарҙан тыш, милли сәнғәт үҫешенә ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышҡан башҡа егеттәр бар. Йылап, аҙымлап булһа ла, алға барабыҙ, тиҙҙән ҙурыраҡ әйбергә тотоноусылар ҙа буласаҡ әле.

### Бабич рухы - йөрәгемдә

Телен, тыуған ерен һөйгән һәр башҡорт кешеһендәге кеүек, миндә лә Бабич рухы, Бабич ялҡыны йәшәй, әлбиттә. Бәлки, беҙгә 24 йәшлек ҡыҫҡа ғүмере эсендә халҡының хәтерендә мәңгегә ҡалырлыҡ эштәр башҡарыусы был шәхес кимәленә күтәрелеү мөмкин дә түгелдер, был төп маҡсатыбыҙ ҙа түгел. Атайындың ғына түгел, халҡыңдың да улы булһаң, халҡың һине ниндәйҙер эштәрең буйынса таный һәм ихтирам итә икән, был да ҙур баһа, оло юлдың изге башланғысы.

Ҡайһы берҙә үҙемде ҙур уңыштарға өлгәшкән билдәле кешеләр менән сағыштырып ҡарайым. Мәҫәлән, Сергей Эйзенштейн үҙенең данлы "Броненосец "Потемкин" фильмын 25 йәшендә төшөргән һәм бөтөн донъяға билдәлелек яулаған. Миңә инде 26 йәш, ваҡыт үтеп бара, мин ниндәй режиссер, тип тә уйланаһың. Икенсе яҡтан, фестивалдәрҙә минең кеүек йәштәрҙең аҙ булыуын, 35-50 йәшлек кешеләрҙең саҡ кино төшөрөү эшенә тотонғанын күрһәң, барыһы ла алда, тип уйлайһың. Әгәр уларҙың күҙҙәрендә осҡондар бар һәм улар әле иң ҙур баһаға лайыҡ булаһағына ышанып йәшәй икән, миңә бошонорға урын да юҡ кеүек. Һәр ваҡыт юғары маҡсаттар менән, ҡыҙыҡлы идеяларҙы тормошҡа ашырып йәшәргә мөмкинлек булһа, ижадсы өсөн бәхет ошо инде.

Сағыштырыу теләге уянған һайын, үҙемде биш йыл элек үткән мәлгә кире ҡайтарып ҡарайым. Әле биш йыл элек кенә яратҡан эшем булһын, тип уйлай инем һәм, ғөмүмән, ул ваҡытта мин нимә эшләргә, артабан нисек йәшәргә икәнен дә белмәй инем. Шунан бөгөнгө тормошонд о күҙ алдына килтерәһең һәм һиңә енел булып китә: бына бит, нимәләр өлгәшелгән, нимәләр эшләнгән. Ҡайҙалыр китеп барғандамы, эштә бәләкәй генә тәнәфес булғандамы, мин ҡалай бәхетле кеше, мине аңлаған тормош иптәшем, яратҡан ҡыҙым, күңелемә оҡшаған эшем, барыһы ла яҡшы, тип уйлап алам. Ошо бәхетте тоя белеү сифаты мине бер ҡасан да ташламаһа икән. Йыш ҡына йүгерәбеҙ, нимәләр эшләйбеҙ, өлөш талап итәбеҙ һәм йәшәргә онотабыҙ. Шуға ла, "Кешеләр, туҡтағыҙ, күккә ҡарағыҙ, үҙегеҙҙең бәхетле икәнегеҙҙе тойоғоҙ!" тип әйткем килә. Ябай бәхет бар бит ул, быны шулай икәненә төшөнөү өсөн тынысланып, сабып барған ерегеҙҙән туҡтап, уйланып алыу ҙа етә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Материал баҫмаға әҙерләнгәндә Айнур Асҡаровтың "Бал әсеһе" фильмы Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университетының XIII "ПитерКиТ" студент фильмдары фестиваленең Гран-приһын яулауы тураһында яҡшы хәбәр алдыҡ. "Үҙ илендә әүлиә булмай", тип әйтергә ярамһаҡ та, бөтөнләй шарттар булмағанда ла милли кинематографияны һаҡлап ҡалыу, үҫтереү, улай ғына ла түгел, кино донъяһында яңы, үҙенсәлекле милли кинематография имиджы булдырыу өсөн тырышыусыларҙы беҙ ҙә күтәрә һәм баһалай белһәк ине. Сөнки нисек кенә булмаһын, милли фильмдарҙың йәштәрҙә милли рух тойғоһон тәрбиәләүҙә лә роле ҙур бит.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨШТӘР...

## ауырыуҙы иҫкәртә

■ АҠШ-тың Миннесота университеты ғалимдары билдәләүенсә, көн һайын йогурт ашау ҡан баҫымын нормала тота. Йогурт составындағы кальций ҡан тамырҙарының һығылмалылығын һаҡларға ярҙам итә. Британияның диетологтар ассоциацияһы ағзаһы Рик Миллер аныҡлап китеүенсә, кальций ҡан тамырҙары һәм мускул системаһын нормала тоторға ярҙам итә. Быны тикшереүҙәр ҙә раҫлай. Көнөнә 120 грамм йогурт ашаған кешеләрҙә был сирҙәр барлыҡҡа килеү хәүефе 31 процентҡа түбәнәйгән. Әммә белгестәр иҫкәртеүенсә, аҙыҡ өҫтәмәһе булараҡ тәҡдим ителгән кальций кире тәьҫир итә - артерияларҙың стенаһы ҡалыная.

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеиныҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Лафборо университеты белгестәре әйтеүенсә, төштәрҙе дөрөҫ итеп юрап, кешенең теге йәки был ауырыу менән ауырыуын белеп була. Табиптар хатта махсус медицина төш юрағысын да төҙөгән. Ҡурҡыныс төштәрҙе йыш күреүселәрҙә мигрень, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы патологиялары күҙәтелә. Шулай уҡ бета-адреноблокаторҙар төркөмөнә ҡараусы дарыуҙар ҡулланыусылар ҙа төштәрендә һаташа. Бындай төштәр йоҡлаған саҡта баш мейеһендә ҡан әйләнеше насарайыуы менән бәйле, тип иҫәпләй ғалимдар. Төштәрҙә ваҡиғалар йыш алышына икән, тимәк, йоҡлаған бүлмәнең температураһы йә бик юғары, йә түбән. Төштәрҙең йышлығы антидепрессант ҡабул итеү, шулай уҡ арҡа, бил, быуындар һыҙлауы менән дә бәйле. Кеше төшөндә кемдәндер ҡасырға тырышһа, Альцгеймер һәм Паркинсон ауырыуҙарына хас сифат. Бындай төштәр нервылар системаһы патологияһы үҫеше тураһында белдерә. Әммә кеше көслө эмоциональ тойғо кисергәндә, арыған ла бындай төш күреүе ихтимал.

■ Әгәр ҙә һеҙ оҙаҡ йәшәргә һәм үҙегеҙҙең йәшегеҙҙән йәшерәк күренергә теләһәгеҙ, селенға бай ризыҡтар менән туҡланығыҙ. Немец ғалимдағы иҫбатлауынса, тап ошо микроэлементтың аҙ булыуы яман шеш үҫеше хәүефен барлыҡҡа килтерә, шулай уҡ организмда ҡартайыу процестарын тиҙләтә. Берлин клиникаһының эксперименталь эндокринология институты ғалимдары менән Брауншвейгтағы Техник университет белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡандағы селенопротеин аҡһымы башҡа аҡһымдар бүленеүҙә ҙур роль уйнай. Һуңғылары организмды ирекле радикалдарҙан һаҡлай, шуға ла селенопротеиндың түбәнәйеүе шундай уҡ насар эҙэмтәләргә килтерә. Шулай уҡ ирекле радикалдарҙан һаҡланмаған организм тиҙ ҡартая. Бөгөнгө көнгә селен сығанағы булып аҙыҡ-түлек тора, уларға йомортҡа һарыһы, спаржа, бәшмәк, кукуруз, бразиль сәтләүектәре инә.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

**Мәләүез районының Бәләкәй Моҡас ауылында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамында халҡыбыҙ тарихын, тормош-көнкүрешебеҙҙе сағылдырған күргәҙмәгә тап булғайныҡ. Уны ошо ауылда йәшәүсе Әминә менән Әхәт Ишмөхәмәтовтар ғаиләһе ойоштортғайны. Мәртәбәле ҡунаҡтар, ауыл халҡы милли ризыҡтарҙан һығылған байрам табынына ҡарағанда, тап ошо үҙенсәлекле күргәҙмә янында оҙаҡҡараҡ туҡталды. Иғтибарҙы йәлеп итерлек, ҡыҙыҡһындырырлыҡ әйберҙәр, ысынлап та, бик күп ине унда. Башҡорт халҡының мәҙәни үҙенсәлеген, матурлыҡты аңлау зауыҡын, тормош-көнкүрешен сағылдырған экспонаттар ике һикелә урынлашҡайны, кейем-һалым, сигелгән, һуғылған әйберҙәрҙе ҡапҡаға, рәшәткәгә элгәйнеләр.**

# ИЛҺӨЙӘРЛЕКТЕ...

## ҡомартҡылар ҙа тәрбиәләй



Иң тәүҙә барыһы ла күргәҙмәләге ағас сумаҙанды күҙҙән үткәрҙе. Уның эсендә һарғая төшкән открыткалар, фотоһүрәттәр, республика һәм район гәзиттәре биттәре, журналдарҙан ҡырҡып алынған фотолар һалынған. Сумаҙан янында сигелгән таҫтамалдар, еҙ батмус урын алған. Икенсе һикелә бүре ҡапҡаны, сөгөлдәр бысаҡтары, һауытһаба кеүек боронғо һәм үткән быуат аҙағындағы эш ҡоралдары теҙелгән. Умартасылыҡ, һунарсылыҡ өлкәһенән булған әйберҙәрҙең күплеге был ғаиләнең атайолатайҙары борон ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеүе, һунар итеүе, балыҡ тотоуы тураһында дәлилләй ине...

Күптән түгел ошо үҙенсәлекле күргәҙмә ойошторған Әминә Ишмөхәмәтова менән осрашып, боронғо ҡомартҡылар йыйыу менән мауығыуҙары тураһында һөйләшергә насип булды. Йорт хужаһы эштә булыу сәбәпле, беҙҙең һөйләшеүҙә ҡатнаша алманы.

-Быны ниндәйҙер хобби йәки мауығыу тип әйтеп булмай, сөнки уның менән махсус шөғөлләнмәйбеҙ, махсус ваҡыт бүлмәйбеҙ, - тип һөйләп китте Әминә апай. - Әсәй-атайҙарҙың, өләсәй-олатайҙарҙың күҙ нурын, күңел йылыһын һаҡлаған иҫтәлекле ҡомартҡыларҙы ташларға ҡул бармағанлыҡтан йыйылған әйберҙәр инде улар. Ағас сумаҙанды, мәҫәлән, ҡәйнәм ошо нигеҙгә килен булып төшкәндә алып килгән. Түнәрәк өҫтәлде ҡайным менән ҡәйнәм өйләнешкән йылдарында алғандар. Был әйберҙәр араһында әсәйем сиккән таҫтамал да бар. Атайыма кейәүгә сығыр алдынан ситен ырғаҡ менән бәйләп, өҫ таҫтамал сиккән булған ул. Ҡартайғас, төҫөм итеп һаҡларһығыҙ, тип, өҫ ҡыҙына бирҙе.

Ҡомартҡыларыбыҙ араһында ҡайнымдың, ҡарт ҡайнымдың төҫө итеп һаҡланған иҫтәлекле әйберҙәр ҙә байтаҡ. Һунар саңғыһы, бүре ҡапҡаны, мурҙа, умартасылыҡ кәрәк-яраҡтары, ураҡ, ағас һәнәк, тырма. Быларҙың бөтәһен дә улар үҙ ҡулдары менән эшләгән. Шулай булғас, йәлләмәй, нисек сүплеккә ырғытаһың уларҙы? Унан һуң, уларҙың балаларыбыҙ өсөн дә тәрбиәүи әһәмиәтен баһаларға кәрәк. Улдарыбыҙ Азат һәм Салауат ошо ҡомартҡыларға ҡарап, олаталарының борон оҫта балыҡсы, умартасы булыуын, талдан мурҙа, тауыҡ, ҡаҙ оялары үреүен белде, киләсәктә уларҙа ла бындай һөнәрҙе үҙләштереү теләге тыуыр, бәлки...

Ысынлап та, Ишмөхәмәтовтар өйөндәге һәр ҡомартҡы бер тарих бит. Бына ағас сумаҙанда һаҡланған 50-се йылдарҙағы "Совет Башҡортостаны"гәзитенә, мәҫәлән, өләсәләренең "Мәжит Ғафури" колхозының алдынғы сөгөлдөрсөһө, унған кассиры, ә олаталарының үҙ эшен яратҡан ферма мөдире, колхоз ветеринары, заманының алдынғы ҡарашлы, эшһөйәр хеҙмәтсәне булыуы тураһында яҙылған. Ишетеү менән үҙ күҙең менән күргән, уҡыған бер түгел бит инде.

Әминә апай улдарына, буласаҡ ейән-ейәнсәрҙәренә күрһәтер өсөн өләсәләренең май һала торған балсыҡ көршәктәрен дә ҡәҙерләп һаҡлай. Күбекмәй бешә торған көбөсәктәре лә бар. Бөгөнгө быуындың күбеһе хәҙер көбөсәктең, күбекмайының нимә икәнлеген дә белмәй. Тағы бында сөгөлдөр бысаҡтары, кәзә тараҡтары һаҡлана. Ысынлап та, сөгөлдөрҙө ҡул менән эшкәртеүҙең нимә икәнлеген белмәгән йәш быуын ҙур бысаҡтарҙы һуғыш ҡоралы тип уйларға ла мөмкин. Кәзә тарағы ла хәҙер тарихта ҡалып бара, сөнки шәл бәйләү ҙә онотола.

Тормош иптәшенең етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа модала булған ике нейлон күлдәген дә ташламаған хужабикә. Шулай уҡ үҙенең туйҙың икенсе көнөндә кейгән күлдәген ҡәҙерләп һаҡлай. Уның туҡымаһын ҡәйнәһе менән ҡайныһы никах көнөндә бүләк иткән булған. Был әйберҙәрҙең бөтәһе лә был татыу ғаилә ағзаларының иң матур ғүмер мәлдәре тураһында йылы хәтирәләр һаҡлай.

Атай-олатайҙарҙан ҡалған аҫыл ҡомартҡылар иҫтәлек кенә түгел. Улар Ишмөхәмәтовтар өсөн эшләп өйрәнерҙәй күргәҙмә материал, өлгө булып та тороуы менән әһәмиәтле. Әхәт Рәфҡәт улы, мәҫәлән, атаһы-олатаһынан күрмәксе, талдан тауыҡ ояһы үреп ҡараған. Умарта тота башлауында ла уларҙы үрнәк итеп ҡуя. Әминә апай иһә әсәһе, ҡәйнәһе кеүек, ҡул эштәренә маһир. Буш ваҡытында төрлө эптәрҙән ойоҡбаш, косынка, шарф, салфетка, ултырғыс япмалары, уйынсыҡтар бәйләп, яҡындарын ҡыуандыра, заказ буйынса ла бәйләй. Яратҡан шөғөлөң, күңелгә яҡҡан эшең булһа, ул кешегә шатлыҡ, ҡыуаныс бирә, әгәр ҙә ул килем дә килтерә икән, был тағы ла яҡшыраҡ.

Ниндәйҙер мауығыуы, шөғөлө булған кешеләр, нисектер, донъя мәшәҡәттәренән, ваҡлыҡтарҙан өҫтөнөрәк, тормошҡа ҡарашы башҡасараҡ, күңел донъялары байыраҡ һымаҡ. Ишмөхәмәтовтарҙың да тормоштары ҡыҙыҡлыраҡ, тулыраҡ кеүек. Уларға ҡарап, илһөйәрлектең ҡайҙан башланыуын, быуындар бәйләнешен тойомлайһың.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# УЙ ТӨБӨНДӘ АЛТЫН БАР,

## уйлай белһәң - табырһың

**Тормош һабағы, аҡыл алырлыҡ ваҡиғалар, күренештәр, кешеләр аҙым һайын осрап тора. Тик уларҙың күбеһенә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тейешле иғтибар бирмәйбеҙ, уйланмайбыҙ, ишеткәнкүргәнебеҙ тураһында фекер төйнәмәйбеҙ генә. Бына бөгөн дә үҙемә ҙур һабаҡ алыр ваҡиға менән осраштым.**

Автобуста бер бала әсәһенә балалар баҡсаһына барғыһы килмәүе, унда бер малайҙың һәр ваҡыт үсекләүе, уйынсыҡтарын тартып алыуы тураһында бер туҡтауһыҙ тыҡылдап килә. Әсәһе иһә ысын сәбәп - ҡалдырып китер кеше булмауы арҡаһында улының баҡсаға мотлаҡ барырға тейешлеге тураһында һүҙ ҡуйыртып торманы, ә сабыр ғына: "Улым, уйнарға ҡамасаулаған, рәнйетергә, кәмһетергә тырышҡан балалар янына барма. Баҡсала бит яҡшы тәрбиәле кескәйҙәр ҙә бар. Күберәк шулар янында бул. Үҙеңде хөрмәт иткән, яратҡандар менән генә дуҫлаш. Үҙең дә тәртипле бул. Шул ваҡытта һиңә һәр саҡ рәхәт, күңелле булыр", - тине. Сабый башҡаса әсәһенә мыжыманы.

Баланың һәм йәш әсәнең һүҙҙәренән шундай һығымта яһаным: тыныс, күтәренке кәйефле, бәхетле булғың килһә, һине алға барыуҙан туҡтатҡан, ҡамасаулаған, тыйған кешеләрҙе һис тә үҙеңә яҡынлатырға, улар менән пландарың, ниәттәрең, хыялдарың тураһында уртаҡлашырға ярамай шул. Шулай уҡ һиңә яҡшы күренергә теләп, төрлө хәбәр, ғәйбәт, хәсәт еткереп, киреһенсә, яуызлыҡ теләүселәргә, хаслыҡ ҡылыусыларға ла иғтибар итергә кәрәкмәй. Яҡшылыҡ теләгәндәр һүҙ йөрөтмәй ул. Шуға ла, оло аҡыллы әлеге йәш әсәй әйткәнсә, һиңә яҡшы уйҙа булғандар менән генә үҙеңде уратып алырға кәрәк. Ундайҙар араһында,ысынлап та, үҙеңде һәр ваҡыт шат, көр күңелле тояһың.

Һабаҡ алған тағы бер ваҡиғаны һөйләп киткем килә. Бер танышым бот һөйәген һындырып, оҙайлы ваҡытҡа

ЙӘШТӘР ҠОРО

# АЙМАҠТАРҘЫ ТЕРГЕҘӘЙЕК,

## йәки Ауылдарҙы нисек һаҡлап ҡалырға?

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Бикмәтовтарҙың өлгөһөн хәҙер беҙгә күтәреп алырға була бит. Әйтәйек, бер ғаилә йә туғандарҙы тәшкил итеүсе бер нисә ғаилә ит кенә етештерә, икенселәре - ҡымыҙ, өсөнсөләре - бал, кемдер арба, сана ғына яһай, кемдер бесән генә саба, кемдәрҙер үҙ техникаһы менән аймаҡты техника менән хеҙмәтләндерә. Аймаҡтың уртаһында баҙар булһа, кешеләр килеп, шунда үҙ тауарын кәрәкле әйбергә алмаштырып алыр йә һатыр ине. Һатыу менән дә айырым ғаиләләр шөғөлләнһә, башҡалар тауар етештереү менән генә шөғөлләнер ине. Бая әйткән менеджер, староста ошо эштәрҙе ойоштора ала бит. Ауыл икенсе система буйынса йәшәргә тейештер барыбер ҙә. Әгәр ҙә ошолай итһәң, ҡыҙыҡһыныу, ауылдың эсендә тауарҙы икенсе кешегә һатырға йәки алмаштырырға мөмкинлек барлыҡҡа килә. Әгәр хужалыҡ итеү яҡшы барһа, эш булһа, йәштәр ауылда тороп ҡалһа, ябылған мәктәп тә асылыр ине. Мәктәпте һаҡлайыҡ тип кенә әйтһәк, дөрөҫ түгелдер, бәлки - хужалыҡ итеү нигеҙен үҙгәртергә кәрәктер. Нисек уйлайһығыҙ?**

**Азамат ИСХАҠОВ:** Был эште алдағыһын емереп түгел, икенсерәк итеп көйләп, яңынан ойоштороп ебәрергә кәрәк. Әгәр ауылды емерһәк, киренән тергеҙә лә алмауыбыҙ бар. ТОС ойошторғас, ауылда күп эштәр эшләнек. Үҙебеҙҙең райондағы бәләкәй ауылдар араһында беренсе урындарҙа барабыҙ. Юлдарҙы ауыл халҡының йөк автомобилдәре ярҙамында төҙөкләндерҙек. Аҡса булмаһа ла шуларҙы эшләнек. Кемдең тракторҙары, машиналары бар, ауыл хакимиәте башлығы менән экскаватор тураһында һөйләштек тә, ҡоҙоҡтар ҡаҙҙырҙыҡ, быуалар быуҙыҡ. Халыҡты ойоштороп була ул.

**Илһам ИМАЕВ:** Бындай идеяны мин беренсе тапҡыр ишетәм. Ауылдың киләсәге, ысынлап та, хужалыҡҡа барып тоташа. Тәүҙә бер нисә ғаилә менән генә башларға кәрәк, инициативалы төркөм барлыҡҡа килтерергә. Ә бында системала эшләй торған кешеләр менән түгел, донъяға, хужалыҡ итеүгә үҙ ҡарашы булған, фекерләй белгән кешеләр менән эшләргә кәрәк.

Ни өсөн һәр кем картуф үҫтерә? Ниңә был эште иң оҫта ун ғаиләгә генә тапшырмаҫҡа? Әлеге ваҡытта ауылда кешеләр 5 тоҡ картуф сәсәлә, 2 тоҡ уңыш йыйып ала. Ә кемдер ике тоҡ картуф сәсеп, егерме тоҡ итеп арттырып ала. Үҙ эшен белгән кешенең тауарын да бик теләп аласаҡтар. Ундайҙар үҙ продукцияһын ҡалала ғына түгел, ауылда ла һата аласаҡ.

**Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ:** Ауыл кешеһенә ер биреп, ошо идеяны ҡолағына төшөрһәң, эшләмәҫ инеме икән? Бик ҡыҙыҡлы идея был. Ысынлап та, туғанлыҡ принцибы буйынса барлыҡҡа килгән ауылдың йәшәү принцибын үҙгәртеү зарур.

**Азамат ИСХАҠОВ:** Ҡырмыҫҡалы районының Шайморатов ауылында эшләп килгән хужалыҡ тураһында ишеткәнһегеҙҙер. Халыҡ телендә "шайморатиктар" тип аталған урындағы валютаһы ла бар уларҙың. Бына ошо хужалыҡты өлгө итеп алғанда ла була. Унда ауыл эсендә тауар хәрәкәте бара.

**▸ТОС рәүешендәме, башҡа формаламы, ауылдар барыбер үҙ яҙмышын үҙе ҡулға алырға тейеш. Әгәр ҙә ҡош балалары һымаҡ хөкүмәттән пенсия, дотация көтөп ултырһаҡ, ауылдарыбыҙ үҫә алмаясаҡ...**

**Азамат ИСХАҠОВ:** Йәй көнө, август айында булһа кәрәк, муниципаль ойошмалар советы кәңәшмә үткәргәйне. Ауыл биләмәләре башлыҡтары килде, мине лә саҡырҙылар был кәңәшмәгә. Элек ТОС-тарға, нисектер, сәйерһенеп ҡараһалар, хәҙер ыңғай фекер тыуа башланы. Өс вариант ҡаралды: үҙидаралыҡты барыһына ла көсләп индерергә, ярҙам итергә һәм ҡамасауламаҫҡа. Тәүге ике вариант килеп сыҡманы. Үҙидаралыҡты көсләп тағырға иртә - кеше быға әҙер түгел, ярҙам итергә финанс мөмкинлек юҡ, тинеләр. Әлегә ҡамасауламайыҡ, тигән ҡарарға килделәр.

Әле беҙ күпме ауылдарҙа булдыҡ, уларҙа "Их, лидер булһа ине!" тип, ултыралар.

Тағы, ауылда пай ерҙәренә эйә булыусылар бар. Ләкин закон буйынса пайҙар пай хужалары араһында ғына бер-береһенә бирелә ала. Ә пайҙы пенсия йәшендәгеләр генә алған, тиһәк тә дөрөҫ булыр, моғайын. Ул кешеләр бөгөн бар, иртәгә юҡ, улар яҡты донъянан китһә, ер ҙә китәсәк.

**Илһам ИМАЕВ:** Был үҙе бер етди тема инде ул. Күп осраҡта үҙенең ере ҡайҙа икәнлеген белмәй халыҡ. Ере ике йыл буш ятһа, һөҙөмтәле ҡулланылмай, тигән хөкөм сығарылыуы ла мөмкин, шунан пай алыусы был еренән үҙе үк баш тартасаҡ. Пайҙар бүлеп биреү - аҡыллы ғына итеп ерҙе халыҡтан тартып алыу ул. Шуға ерҙәрҙе алып, крәҫтиән хужалыҡтарына биреп булһа ла һаҡлап ҡалырға тырышырға кәрәк. ВТО-ға ингәс, сит ил сәнәғәтселәренә бушҡа бирәсәктәр уларҙы, юғиһә.

**Азамат ИСХАҠОВ:** Эйе, ниндәйҙер эшкә тотонор булһаҡ, ул эштең алдынан йөрөр лидер эҙләй башлайбыҙ. Ә ниңә беҙ улай итәбеҙ, ниңә ҡытайҙар, вьетнамдар ерҙең теләһә ҡайһы мөйөшөнә барып, ҡайҙа булһа ла урынлашып, нормаль рәүештә йәшәргә генә тырышып тора? Ниңә беҙҙә эшләү һәм үҙ-үҙеңде үҫтереү тигән төшөнсә юҡ? Бәлки, ошолар тураһында ла уйларға кәрәктер. Ҡытайҙарға хас эшлеклелек кәрәк беҙгә лә. Беҙҙең яҡтарға килеп, теплицалар төҙөп, ниндәй генә йәшелсә-емеш үҫтермәй бит улар. Тажиктар ҙа, үзбәктәр ҙә аҙ ғына эш хаҡына бил бөгә. Беҙ иһә, улар кеүек үк тырышып эшләп була, эшләй алабыҙ икәнде күҙ алдыбыҙға ла килтерә алмайбыҙ түгелме, ағай-эне?

**Илнур ҠОТЛӘХМӘТОВ:** Ысул маҡсатты аҡлай тиҙәр бит. Ниндәй генә ысулдар ҡулланһаҡ та, улар ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә икән, шул юл иң дөрөҫө буласаҡ. Тик һөйләшеүҙәрҙән аныҡ эштәргә күсергә генә онотмайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө һөйләшеү барышында ауылды һаҡлау юлдары тураһында уйландыҡ, уның механизмы ниндәй булырға тейешлегенең төбөнә төшөргә ынтылдыҡ. Төп һүҙ әйтелдеме икән? Был турала әле уйлай, фекерләшә торғаныбыҙ алдалыр. Шулай ҙа, киләсәгебеҙ өсөн төн йоҡоларын йоҡламай уйланған йәштәребеҙҙең юғарыла әйтелгән һүҙҙәре гәзит уҡыусыларыбыҙ күңеленә барып еткәндер, тип ышанғы килә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмәләште.**
**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

---

түшәккә ятты. Операциянан ҡурҡтымы - яһатманы, аяғына ауырлыҡ тағылған көйө хәрәкәтһеҙ ятыуын дауам итте. Өс айҙан һуң ғына тороп ултырҙы, әммә баҫырға ярамай ине әле уға. Шуға ла өйөнә носилкала ҡайтты. Уның иҫ киткес ихтыяр көсө тураһында ғына түгел, ә матур итеп йәшәргә ынтылыуы тураһында һөйләгем килгәйне, сөнки был танышым, кем әйтмешләй, ашарын ашаған, эсерен эскән йәштә, һикһәнгә етеп барған оло быуын вәкиле ине. Тәүгә тәпәй баҫҡан баланы күҙ алдына килтерәһегеҙме - бына шулай аяҡҡа баҫты ул. Тәүҙә һөйәлеп, тотоноп ҡына баҫып тора ала ине. Аҙна-ун көн тирәһе баҫырға өйрәнде, шунан беренсе аҙымын эшләне. 9-10 ай үткәс иһә урамда йөрөй башланы. Еңелгә тиҙ өйрәнермен, тип, ҡултыҡ таяғына ла таянманы, уны ҡулына ла алманы. Хәҙер иһә, шөкөр, йүгереп йөрөй.

-Тормош шул тиклем матур, әммә бик ҡыҫҡа. Уның һәр мәлен, сәғәтен матур үткәрергә кәрәк, - тип ҡабатларға ярата.

Аяҡҡа баҫырына шул тиклем ышанысы ҙур ине уның, шуның өсөн дә һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәгәндер, тип уйлайым. Ҡартмын, аяҡҡа баҫмаҫмын инде, тип, күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелмәне. Түшәктә ятҡанда ла иртәгәһе көнөн генә түгел, ә алдағы йылда нимә эшләргә кәрәклеген хәстәрләп ятҡан, ҡарт көнөндә аяҡһыҙ ҡалып, кеше ҡулына ҡарап ятырға ҡушҡан яҙмышына бер ниндәй ризаһыҙлыҡ белдермәгән кешегә нисек һоҡланмайһың? Ундайҙарҙан, ысын мәғәнәһендә, өлгө алырға була...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун һигеҙенсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Музыка "тотҡонлоғонда"**

"Музыканың тылсымы иң уҫал йыртҡысты ла арбау һәләтенә эйә", тип яҙған инглиз шағиры Уильям Конгрив. Аң тупланышын һәм билдәле бер кәйеф тотороҡлоғон һаҡларға кәрәк булғанда ла музыкаға таянырға була. Музыканың беҙҙең кәйефкә ғәжәйеп күп төрлө йоғонтоһон кешеләр әле генә аңлай башланы. Олимпия чемпиондарының күбеһе музыканы үҙҙәренең күнекмә барышында файҙалана. Һеҙ ҙә уны үҙегеҙҙең көнкүрешкә индерә алаһығыҙ.

Әгәр тынысланырға теләһәгеҙ, иң һәйбәте - классик музыка. Пачелбеланың "Канон"пьесаһы кеүек музыка бик яҡшы тынысландыра һәм, әйтерһең дә, беҙҙе икенсе донъяға алып китә. Үҙегеҙгә уңайлы бер ваҡытта, әйтәйек, төшкө аштан һуң, тыныс ҡына урынға ултырығыҙ ҙа тулыһынса музыкаға бирелегеҙ. Ул һеҙҙең күңелегеҙгә үтеп инһен һәм үҙенең бар матурлығын асып һалһын. Джаз музыкаһы шулай уҡ мөғжизәләр атҡара, кәйефте күтәрә һәм илһамландыра. Әгәр ундай яҙмалар таба алмаһағыҙ, классик һәм джаз музыка тапшыра торған радиостанцияларҙың береһенә көйләнегеҙ. Радио - бик күп өҫтөнлөктәре булған яҡшы дуҫ ул.

**Икенсе бүлек: тән. Сәләмәт уйҙар - сәләмәт фекер**

Табиптарҙың күбеһе фекерләү рәүешенең иммун системаһына һәм кешенең дөйөм һаулыҡ торошона йоғонтоһон аңлай башланы инде. Ҡурҡыу һәм ҡайғырыу кеүек эмоциональ торош лимфалар системаһында һәм гипоталамуста эшкәртелгәндән һуң нейропептидтар тип аталған химик матдәләр аша организмдың иммун системаһына үтеп инә. Бөгөнгө теориялар раҫлауынса, сәләмәт тәндең уйҙағы образы мейе күҙәнәктәренән иммун системаһы күҙәнәктәренә ебәрелә.

Яман шеш менән сирлеләр иммун күҙәнәктәренең яман шеш күҙәнәктәрен юҡ итеү процесын күҙ алдына килтереүсе күнегеүҙәр эшләгәндән һуң һөҙөмтәләр барыһын да ғәжәпкә ҡалдырған. Ошо уҡ стратегияны ныҡлы сәләмәтлек һаҡлау өсөн дә файҙаланырға мөмкин. Үҙегеҙ өйрәнгән тынысландырыу ысулдарын ҡулланып, аңығыҙҙы көсөргәнештән ҡотолдороғоҙ, бынан һуң үҙегеҙҙе идеаль физик торошта тип күҙ алдына килтерегеҙ. Йөҙөгөҙ сәләмәтлек менән балҡый, тирегеҙ ялтырап тора, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Үҙегеҙҙе туп-тура, төҙ кәүҙәле, көслө һәм бәхетле хис итегеҙ. Был күнегеүҙе көнөнә ике тапҡыр бер нисә ай буйына башҡарығыҙ һәм һөҙөмтәне үҙегеҙгә арта барған ихтирам рәүешендә һәм һаулығығыҙҙың яҡшырыуында күрерһегеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Идеаль шәхес**

Идеаль шәхестең алты сифатын иҫтә тотоғоҙ:
- Теләһә ниндәй хәлдәрҙә лә үҙ-үҙеңде ҡулда тотоу.
- Бөтә тойоу ағзаларын контролдә тотоу.
- Айыҡ тормош рәүеше һәм дөрөҫ туҡланыу.
- Нәфсе һәм теләктәрең менән идара итә белеү.
- Еңеүҙәрҙә тотанаҡлыҡ, уңышһыҙлыҡтарға осрағанда өмөт һаҡлай белеү.
- Башҡаларҙы аңлай алыу һәләте, тормошта сама белеү, ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеүҙә ныҡышмалыҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 11 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.05 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом".
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Крик совы". Детективный сериал. 7-я и 8-я серии (16+).
23.30 "Германская головоломка".
01.25, 03.05 "Весть этот джаз" (16+).
03.00 Новости.
03.50 "Замороженная планета" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны института благородных девиц". Сериал.
16.00 "Семейные обстоятельства". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10, 19.40 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Тайны следствия-10". (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Братья по обмену". Комедийный сериал. 1-4-я серии (12+).
23.45 "Дежурный по стране".
00.40 "Девчата". (16+).
01.25 "Глаза дракона". Криминальная драма (16+).
03.15 "Закон и порядок-18" (16+).
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Риф Бикбаев (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Юлиә һәм Илнар Ҡотдосовтар йырлай (6+)
14.30 "Хазина". "Мөнәжәттәр" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлли Мөбәрәкова (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 11.15 Новости недели.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 18.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00, 23.00 "Песня года".**
**13.45, 05.30 "Мелодии души". Концерт (12+).**
**14.45 "Автограф".**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русс. яз.).**
**16.45 "Клио".**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Акмулланын хак юлынан".**
**19.00 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.35 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.30 "Салават Юлаев" (12+).**
**00.45 "Специальный репортаж" (16+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 Ризван Хамит. "Под знаком Марса".**

## 12 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.05 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Домработница". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Самый лучший муж" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Крик совы". Детективный сериал. 9-я и 10-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
0010 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (18+).
01.10, 03.05 "28 дней спустя". Триллер (18+).
03.00 Новости.
03.25 "Замороженная планета" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
